***Әгәр ҙә һин тиҙ һәм насар эшләһәң, һинең тиҙ эшләүеңде оноторҙар, ә насар эшләүең оҙаҡҡа хәтерҙә ҡалыр. Әгәр ҙә һин эште аҡрын һәм яҡшы башҡарһаң, һинең аҡрын эшләүеңде онотторҙар, ә яҡшы эшеңде оҙаҡ ваҡыт хәтерҙә ҡалдырырҙар.***

1 МАЙ


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

28 АПРЕЛЬ - 4 МАЙ (АЛАҒАРАЙ - ҺАБАНАЙ) 2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы иреклеIRE

№17 (487)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Ни өсөн беҙ...**

коммунизм төҙөмәнек?



5

**Интернеттағы аралашыу...**

башҡортса һәм рухлы булһын



6

**Томлыҡтарға...**

башҡорт тарихы теркәлде



7

**Ниғмәтуллиндарҙың "ғаилә оркестры"...**

Унда һәр кем үҙен бәхетле тоя



8-9

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҢӘГЕҘ...

## Бөгөнгө көндә хеҙмәт һаман да беренсе урында торамы, әллә уның ҡәҙере киттеме?

***Әмир МУСИН, Социалистик Хеҙмәт Геройы:*** Заманалар ниндәй генә үҙгәрештәр кисермәһен, хеҙмәт барыбер кеше тормошондағы иң беренсел ихтыяж һәм изге бурыс булып ҡалырға тейеш, сөнки фәҡәт матди һәм рухи байлыҡтар тыуҙырыусы ижади хеҙмәт кенә кешене кеше итә. Беҙ, мәҫәлән, бала сағыбыҙ һуғыш йылдарына тура килгән быуын, серек картуф ашап, билде биштән быуып, бәләкәйҙән эшләп үҫтек. Шуға ла, моғайын, хеҙмәт ҡәҙерен ғүмерлеккә аңыбыҙға һеңдергәнбеҙҙер: тормошобоҙҙо хеҙмәттән башҡа күҙ алдына ла килтермәй инек. Уҡырға ла дәрт-дарман ҙур ине. Мәктәпте тамамлағас, мин Мәскәү психология институтына уҡырға инергә хыялландым, ләкин тормош үҙенекен итә шул: тиҙерәк һөнәр үҙләштереп, эшләй башларға кәрәк ине. Шулай итеп, мин Өфө нефть техникумын һайланым: ятағы бар, стипендия бирәләр, ашаталар - ауыл балаһына тағы ни кәрәк инде? 10 класты бөткәндәргә оҙаҡ та уҡырға түгел. Һәм, ысынлап та, тиҙ арала ҡоролма операторы һөнәренә эйә булып, яңы төҙөлөп ятҡан нефть эшкәртеү заводында эшләй ҙә башланым. Тәүҙә ябай оператор булдым, аҙаҡ, тәжрибә туплағас, ҡоролма начальнигы итеп ҡуйҙылар. Ләкин беҙ начальник булам тип тә, дан өсөн дә түгел, ә хеҙмәткә башҡа мөнәсәбәтте белмәгәнгә күрә шулай эшләнек. Булмышымды эшемдә тапһам, яҙмышымды ла эшем менән яҙҙым. Әле заманы башҡа, әлбиттә: гөрләп торған завод-фабрикалар туҡтап, колхоз-совхоздар тарҡатылғас, хеҙмәттең дә ойоштороусы, туплаусы роле юғалып ҡалды һымаҡ. Ләкин был тәү ҡарашҡа ғына шулай. Асылда иһә, хеҙмәт һәр кемдең тормош ихтыяжы, намыҫ ғәмәле булып ҡала килә. Ғаиләне аҫырарға, балаларҙы үҫтерергә, уҡытырға кәрәк - тимәк, эшләргә кәрәк. Балаларҙы иң тәүҙә - ғаиләлә, унан мәктәптә хеҙмәт тәрбиәһенә өйрәтеп үҫтереү фарыз, юғиһә, хәҙер ата-әсә елкәһендә йәшәү, һәр төрлө яман ғәҙәттәргә бәйлелек көсәйҙе. Былар барыһы ла эшһеҙлектән, ялҡаулыҡтан, күнеленә дауа булырҙай шөғөлөң юҡлыҡтан барлыҡҡа килә лә инде.

***Айтуған НИҒМӘТУЛЛИН, менеджер:*** Бынан алты йыл элек Башҡортостан аграр университетын тамамлап, агроном һөнәренә эйә булып сыҡтым, ләкин күрәм: агрономдарға ҡытлыҡ кисермәй бөгөн ауыл хужалығы. Элеккеләй диңгеҙ кеүек йәйрәп, тулҡынланып ятҡан иген баҫыуҙары ла һирәк күренеш, ҡолас ташлап эшләп китергә һис форсат булманы. Үҙемдең районға ҡайтып, ҡәрҙәш тейеш бер ағайҙың фермер хужалығында эшләп маташтым "йомошсо малай" булып. Хужа үҙе лә агроном, етмәһә. Туҡтауһыҙ ваҡ-төйәк йомош менән күрше-тирә райондарға, ҡалаға сабыуҙар ялҡытты тамам, ахырҙа, ҡул һелтәнем дә Өфөгә сыҡтым да киттем. Баш ҡалала, үҙегеҙ күрәһегеҙ, һуңғы йылдарҙа бик күп сауҙа комплекстары төҙөлә. Шуларҙың береһендә эшләп йөрөгән иптәш егет үҙе янына саҡырып алды. Менеджер һөнәрен үҙләштерергә тура килде. Әле баҡсасылыҡ һәм хужалыҡ тауарҙары бүлегендә яҡшы ғына эшләп йөрөйөм, эш хаҡы ла зарланырлыҡ түгел. Тырышҡаныңды күрһәләр, баһалап, күтәреп алырға торалар. Ялҡауланмаһаң, өҫтәмә эш тә күп бында, артыҡ аҡса кеҫәңде тишмәй. Ялға ҡайтһам, ауылдан киткәнеңә үкенмәйһеңме, тип һорайҙар, ә мин, минән бигерәк әсәйем шатланып бөтә алмай, ауылда ҡалһаң, анау бер нисә класташың менән эскесегә әйләнә инең бит, ти. Ысынлап та, мәктәп тамамлағас, армияға барып ҡайттылар ҙа, икәүһе шунда уҡ өйләнә һалды - бер ерҙә лә бер көн дә эшләмәне үҙҙәре, ата-әсәләре, бисәләре елкәһендә яталар. Өсөнсөһө утыҙҙы үтте, һаман өйләнмәгән, әсәһенең пенсияһын эсеп ята, дүртенсе егет ҡыҙмаса башҡа аҫылынып ҡуйҙы. Әйткәндәй, хәҙер әрәмтамаҡтар күбәйеп бара икән. Йәштәрҙең ҡайһылары, эшен дә, ашын да онотоп, баштанаяҡ виртуаль донъяға бәйләнгән социаль төркөмдө тәшкил итә, тип тә уҡыным яңыраҡ. Улар ҙа ата-әсәләре елкәһендә йәшәй - ҡыҙғаныс. Һеҙҙең һорауға килгәндә, мин, әлбиттә, хеҙмәт яҡлы. Элекке кеүек энтузиазм бик күҙәтелмәһә лә, хеҙмәт үҙенең романтикаһын юғалтһа ла, барыбер уның ҡәҙере бар. Атай-әсәйҙәр колхозда эшләгәндә, "Хеҙмәт төбө - хөрмәт" тип ҙурлайҙар ине уларҙы. Был әйтем әле лә үҙ көсөндә ҡала, тик уны мин иң тәүҙә үҙ-үҙеңде хөрмәтләү тип ҡабул итәм.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ТУҠТА, МӘЛ!

## КӨТӘЛӘР

***Еңеү яҙы килә. Донъя ҡабат***
***Хакимлығын бирә сәскәгә.***
***Сәскә ата тағы беҙҙең күңел,***
***Сал ҡунһа ла күптән сәстәргә.***

***Йөрәк яраларын ҡаплап тора***
***Күкрәктәге ялтыр йондоҙҙар.***
***Еңеү яҙы... Ләкин яраларҙы***
***Баҫа алмаҫ хатта мең яҙҙар.***

**Мөнир ИҠСАНОВ.**



Фотоһүрәттең авторы Флүр Ғазин тураһындағы материалды 11-се биттә уҡығыҙ.

✓ *Бөгөн хеҙмәт баҙарында иң күп талап ителгәне - эшсе һөнәрҙәре. Улар етештереү өлкәһендә, төҙөлөштә, транспорт һәм элемтәлә, аграр тармаҡта, һаулыҡ һаҡлау һәм хеҙмәттәр күрһәтеү өлкәләрендә талап ителә.*



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Бөгөнгө көндә хеҙмәт һаман да беренсе урында торамы, әллә уның кәҙере киттеме?

**(Башы 1-се биттә).**

***Рәзинә НАСИРОВА, БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығының Халыҡты эш менән тәьмин итеү дәүләт идаралығы начальнигы урынбаҫары:*** Хеҙмәттең тормошобоҙҙа тотҡан урыны беҙҙең идаралыҡ эшмәкәрлеге фонында айырыуса асыҡ сағылыш таба. Быйыл йыл башынан алып ҡына ла (ғинуар - март) республика мәшғүллек үҙәгенә эш һорап 102 мең граждан мөрәжәғәт итте. Шуларҙың 26,8 меңе эш эҙләүсе сифатында иҫәпкә ҡуйылды, 58,9 проценты беҙҙең ярҙам менән эшкә урынлашты. Беҙҙең әйткәндәрҙә һандар өҫтөнлөк итер, әлбиттә, ләкин тап ана шул һандар һәм факттар үҙҙәре өсөн үҙҙәре асыҡ һөйләй ҙә инде. Эш эҙләүсе граждандарҙың 84,2 проценты хеҙмәт эшмәкәрлеге менән мәшғүл булмаған, 15,4 проценты уҡыуҙан буш ваҡыттарында эшләргә теләүсе студент һәм уҡыусылар, 7,2 проценты ойошма, предприятие бөтөрөлөү йәки штат ҡыҫҡартылыу сәбәпле эштән сығарылған кешеләр. Һөнәр һәм квалификация йәһәтенән ҡарағанда, эш эҙләүселәрҙең 47,3 проценты - элекке эшселәр, 23,7 проценты - хеҙмәткәрҙәр, ә инде ошоға тиклем эшләмәгән һәм тәүгә эш эҙләүселәр 29 процент тәшкил итә. 2012 йылдың 1 апреленә республика буйынса 30,2 мең эшһеҙ иҫәптә тора, уларҙың яртыһы тип әйтерлек башланғыс һөнәри һәм дөйөм урта белемгә, шул уҡ күләмдәгеһе юғары һәм урта һөнәри белемгә эйә. Беҙҙә һаман да йәштәр араһында эшһеҙлек проблема булып ҡала, сөнки бының үҙ сәбәптәре бар: һөнәри белем һәм тәжрибә етешмәүе уларҙы хеҙмәт баҙарынан ҡыҫырыҡлай. Мәҫәлән, быйылғы йылдың апреленә республикала 16 йәштән 29 йәшкә тиклемге 7 мең эшһеҙ теркәлгән, шуларҙың 663-ө - профессиональ белем биреүсе уҡыу йортон тамамлаусылар. Идаралыҡ тарафынан ошо йәштәрҙең 6,6 меңе даими һәм ваҡытлыса эшкә йәлеп ителде. Был йүнәлештә эштәрҙе тағы ла йәнләндереү маҡсатында Өфө ҡалаһының халыҡ мәшғүллеген тәьмин итеү үҙәге нигеҙендә Йәштәр хеҙмәт биржаһы ойошторолдо. Хеҙмәт баҙарындағы үҙгәрештәрҙе, эш биреүселәр һәм эшһеҙҙәр ихтыяжынан сығып, мәшғүллек хеҙмәте эшһеҙҙәрҙе һөнәри әҙерләү, ҡайтанан әҙерләү һәм квалификацияларын күтәреү буйынса әүҙем эш алып бара. Бөгөн хеҙмәт баҙарында иң күп талап ителгәне - эшсе һөнәрҙәре. Улар етештереү өлкәһендә, төҙөлөштә, транспорт һәм элемтәлә, аграр тармаҡта, һаулыҡ һаҡлау һәм хеҙмәттәр күрһәтеү өлкәләрендә талап ителә. Шул уҡ ваҡытта педиатрҙар, терапевтар, зоотехниктар, проектлаусы инженерҙар, инженер-технологтар һ.б. Шуны ла әйтергә кәрәк: юрист, иҡтисадсы һәм финанс йүнәлешендәге белгестәргә ихтыяж кәмене. Теләгән кеше, айырыуса йәштәр, хеҙмәт баҙарында талап ителгән һөнәрҙәргә беҙҙә әҙерлек үтеп, яңы һөнәр үҙләштерә ала. Бөтә һөнәрҙәр ҙә һәйбәт, вакансиялар бар - фәҡәт эшләргә теләк кенә булһын!

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

БАШ ЙОРТТА...

# ТРОЛЛЕЙБУСТАР КӘРӘКМЕ?



**Өфө - республика йөрәге. Барлыҡ мөһим ҡарарҙар нәҡ ошонда ҡабул ителә, төбәк өсөн әһәмиәтле эшлекле осрашыуҙар бында үтә, мәҙәни тормош та һәр саҡ гөрләп тора. Сит илдән килеүселәр ҙә тәүге тәьҫоратты нәҡ Өфөгә ҡарап төйнәй. Республиканың башҡа ҡалаларында һәм ауыл-ҡасабаларында йәшәүселәр өсөн дә Өфө һәр саҡ үҙенә тартып, саҡырып тороусы үҙәк.**

Һуңғы ваҡытта баш ҡала күҙгә күренеп үҙгәрә. Яңы һәм уңайлы йорттарҙан торған тотош райондар ҡалҡып сыға. Ләкин күптәрҙең ул өйҙәрҙән фатир алырлыҡ аҡсаһы ғына юҡ. Шуға күрә республика власы иғтибарын күберәк осһоҙораҡ хаҡҡа социаль торлаҡ төҙөүгә йүнәлтһә, һөҙөмтәләр һәйбәт булыр ине, сөнки йорт-ере булған кешенең эшкә лә күңеле ятып тора, тимәк, ҡала ойошмалары, заводтар һәм башҡа учреждениелар һөҙөмтәле эшләйәсәк.

Шулай уҡ Өфө урамдары киңәйтелеп, автомобилдәргә күберәк урын булдырылыуы ла һәйбәт үҙгәреш. Ләкин был ғына тығындар мәсьәләһен хәл итә алмай икәнлеген үҙ күҙебеҙ менән күрәбеҙ. Шулай уҡ бихисап автомобиль төтөнө лә ҡалала яҡшы атмосфера тыуҙырмай. Яңыраҡ телевизорҙан сит илдәге ниндәйҙер ҡалала ҡулында автомобиль йөрөтөү таныҡлығы һәм автомобилгә документы булған кешеләргә шишәмбенән кесе аҙнаға тиклем йәмәғәт транспортында бушлай йөрөү мөмкинлеге бирелеүе хаҡындағы сюжет ҡарағайным. Ысынлап та, аҙнаһына ике-өс көн генә булһа ла автомобиль йөрөтөүселәр тимер аттарында түгел, ә йәмәғәт транспортында йөрөһә, ҡала һауаһы ла бер аҙ таҙарып ҡалыр ине. Шулай уҡ ҡиммәтле бензин өсөн түккән аҡса ла кеҫәләрендә ҡалыр ине. Беҙҙең ҡала хакимиәте лә ошондайыраҡ сара уйлау мөмкинлеге тапһа, бик яҡшы булыр ине, тигән фекерҙәмен.

Транспорт мәсьәләһен ҡуҙғатҡас, тағы ла бер мәсьәләне билдәләп үткем килә. Өфө урамдарында ана ҡойолам, бына емереләм тип саҡ ҡыбырлап йөрөгән трамвайҙарҙы яңыларына алыштырғанда ла ҡала йөҙө үҙгәреп китер ине. Трамвайҙың эксплуатациялау ваҡыты 15 йыл тирәһе буғай. Ә беҙҙең ҡала урамындағы трамвайҙар күптән инде был срокты уҙып киткәндер. Шулай уҡ троллейбустарҙың да мөһимлеген аңламайым. Көнөнә ун-ун биш пенсионерҙы алып йөрөгән, ләкин юлда автомобиль һәм автобустарға ҙур мәшәҡәт тыуҙырған троллейбустарҙы бөтөнләй алып ташлағанда һәйбәтерәк булыр ине, минеңсә. Эйе, пенсионерҙарға унда йөрөү осһоҙға төшә, ләкин шул уҡ йөрөү билеты менән "Башавтотранс" автобустарында йөрөү мөмкинлеге бирелһә, барыһы ла отасаҡ түгелме ни? Троллейбус йөрөтөүселәр һәм кондукторҙар эшһеҙ ҡаласаҡ, тиерҙәр. Эҙләгәндә, был проблеманы ла хәл итеү юлын табырға була, минеңсә.

Ләкин Өфөлә тик етешһеҙлектәрҙе генә эҙләү хата булыр ине. Мәҫәлән, Салауат Юлаев проспектының төҙөлөүе, ҡала ситендәге "Икеа", "Ашан" һәм башҡа ошондай ҙур гипермаркеттарҙың асылыуы ҡалаға бөтөнләй икенсе, юғарыраҡ статус бирә, сөнки барлыҡ ҙур ҡалаларҙа ла ошондай магазиндар күптән уңышлы эшләй. Шулай уҡ ҡалала яңынан-яңы балалар майҙансыҡтарының төҙөлөүе, бассейндар асылыуы ла ыңғай күренеш. Ғөмүмән, һанай китһәң, Рәсәйҙең башҡа ҡалаларындағы кеүек үк Өфөнөң дә үҙ етешһеҙлектәре һәм уңыштары, ҡаҙаныштары етерлек. Ләкин нисек кенә булмаһын, үҙебеҙҙең Өфө барыбер күңелгә яҡынораҡ һәм ҡәҙерлерәк.

**Гөлназ ХИСМӘТОВА.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**2012 йылдың икенсе яртыһында ла өйҙәрегеҙгә "Киске Өфө" гәзите килеүен, уның аша зиһенде ҡуҙғытыр, йөрәкте ярһытыр, рухты күтәрер, сәмгә ут һалыр мәғлүмәт алырға теләйһегеҙме? Улайһа, июнь айы бөткәнсе почтаға инеп, баҫмабыҙға яҙылыу мөҙҙәтен оҙайтып ҡуйырға онотоп ҡуймағыҙ.**



Учалы районының башҡорт теле уҡытыусылары.

Кем "Киске Өфө"гә апрелдә үк яҙылып ҡуйған, квитанцияһын редакциябыҙға ебәреп, бәхетен һынап ҡараһын: **өс кеше "400 башҡорт халыҡ йыры" китабына эйә буласаҡ.**

Квитанцияларығыҙ менән бергә **тыуған көндәрегеҙҙе лә** хәбәр итегеҙ. Гәзитебеҙ аша уҡыусыларыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

**"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, ата-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

"Киске Өфө"нөң индексы - 50665. **2012 йылдың икенсе яртыһына яҙылыу хаҡы - 354 һум 24 тин.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Рәсәй Федерацияһы Дәүләт Советының Мәскәүҙә үткән киңәйтелгән ултырышында ҡатнашты, сараны Дмитрий Медведев үткәрҙе. РФ Президенты үҙенең сығышында йәмғиәттең Рәсәй Федерацияһы субъекттары башлыҡтарын һайлап ҡуйыу системаһына кире ҡайтыуға әҙер булыуын билдәләне. "Үҙ ваҡытында төбәк етәкселәрен һайлап ҡуйыу системаһын туҡтатырға мәжбүр булғайныҡ, - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Президент. - 90-сы йылдарҙан ҡалған тотороҡһоҙ сәйәси системаны санациялау һәм һауыҡтырыу талап ителде. Был маҡсаттарға ирештек, сепаратизм тенденциялары туҡтатылды". Дмитрий Медведев фекеренсә, хәҙер төбәктәрҙә йәшәүсе халыҡҡа үҙенә сәйәси тормошта ҡатнашыу мөмкинлеген бирергә кәрәк, атап әйткәндә, Рәсәй Федерацияһы субъекттары башлыҡтарын һайлап ҡуйыу хоҡуғын биреү.

✓Дәүләт Советының киңәйтелгән ултырышында ил Президенты Дмитрий Медведев шулай уҡ төбәктәрҙең хоҡуҡтарын киңәйтеүҙе яҡлап сығыш яһаны. Уның фекеренсә, федераль бюджеттан йүнәлтелгән субсидия һәм субвенцияларҙы төбәктәр юғарынан артыҡ сикләүҙәрһеҙ үҙаллы файҙалана алырға тейеш. Дмитрий Медведев бының күп төбәктәрҙең үҫешенә импульс бирәсәгенә ышана.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Мәскәүҙә ҡала яны тимер юл транспортында пассажирҙар һәм йөк ташыуҙы ойоштороу, шулай уҡ Волга буйы федераль округында тимер юл транспортына бәйле инвестиция проекттарын тормошҡа ашырыу мәсьәләләренә арналған кәңәшмәлә ҡатнашты. Башҡортостанда ҡала яны тимер юл транспорты йыл һайын 1,5 миллиондан ашыу кешене ташый. Транспорттың был төрөндә мәктәп уҡыусыларының, студенттар һәм айырым категориялағы граждандарҙың льготалы юл йөрөүе ҡаралған.

✓"Рәсәй Почтаһы" федераль дәүләт унитар предприятиеһы байрам көндәре өсөн махсус эш режимы билдәләне. 30 апрелдә һәм 8 майҙа бөтә кластағы почта элемтәһе бүлексәләре билдәләнгән график буйынса эшләй, эш көнө бер сәғәткә ҡыҫҡартыла. 1 һәм 9 май бөтә почта бүлексәләре өсөн дә ял көнө буласаҡ. 2, 7 һәм 10 майҙа почта элемтәһе бүлексәләре ғәҙәттәге режимда эшләйәсәк.

*МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ*

**Спартак Ильясов "Сағымдағы олоу" бәйәнендә бүрелектең, ғөмүмән, йыртҡыслыҡтың асылы хаҡында тәрән уйланырға мәжбүр итеп, уҡыусы алдына шундай һорау ҙа ҡуя: ни өсөн тәбиғәттә һәм тереклектә үҙ биләмәндә үҙаллы һәм үҙенсә йәшәүгә ынтылыу башҡалар тарафынан яуызлыҡ тип ҡабул ителә һуң? Ни өсөн хатта үҙ йортонда йәшәгән кеше, үҙ биләмәһендә көн күреүсе халыҡ ситтән килеүселәрҙең баҫымын тойған саҡта үҙен бүре итеп тоя башлай? Минеңсә, автор был әҫәрендә ошо һорауҙарға ла яуап эҙләй кеүек. Был һорауҙар әҫәрҙә асыҡтан-асыҡ ҡуйылмай, әммә айсбергтың аҫҡы өлөшөндә улар бар. Айсберг, тигәндән, әҫәрҙә уның күренеп торған өлөшөндә бүреләр, аҫҡы өлөшөндә - халыҡ, кешелек яҙмышы. Ә бүрелектең асылы нимәлә һуң? Йыртҡыслыҡтамы? Түгел, сөнки Спартак Ильясов әйткәнсә, туйыныу, тамаҡ аҫрау, ризыҡ табыу ысулын улай атап булмай. Ҡуш тырнаҡлыларҙы - үлән, аҙау тешлеләрҙе - ит ашауҙа, серәкәйҙе ҡан эсеүҙә гәйепләп буламы ни? Бәлки, бүрелектең асылы үҙ тоҡомдашына ҡарата тоғрологонда, икенсе төрлө итеп әйтһәк, ҡан тартыу көсөндәлер? Ни өсөн тигәндә, тәбиғәттә был күрһәткес буйынса бүреләргә еткән тере йән дә юҡ кеүек...**

# ЙӘН ТАРТМАҺА ЛА...

## ҡан тарта



Үҙ биләмәһендә үҙенсә йәшәргә теләгән кешенең ситтәрҙең ҡыҫымы һөҙөмтәһендә ни өсөн үҙен бүре халәтендә тоя башлауына яуап бирер алдынан әҙ генә тарихҡа сәйәхәт яһайыҡ һәм башта шундай һорауға яуап эҙләп ҡарайыҡ: Ерҙең ысын хужалары, беҙҙеңсә әйтһәк, аҫабалары кемдәр һуң улар? Кем булһын, әлбиттә, кеше, тип әйтер берәү. Былай тип әйтеүсе иң тәүҙә XVIII быуатта йәшәүсе француз ғалимы Жорж Луи Бюффондың "Тәбиғи тарих" хеҙмәтен иҫкә төшөрөр. Бюффон билдәле инглиз ғалимы Чарльз Дарвиндан күпкә алда кешенең маймылдан барлыҡҡа килеүе хаҡында яҙа. Был китап утта яндырыла. Дарвин иһә үҙенең "Кешенең барлыҡҡа килеүе һәм енси һайланыш" хеҙмәтендә маймыл менән кешенең уртаҡ сифаттарын өйрәнә.

Дарвинизм донъяның ғилми йәмәғәтселеге тарафынан төшөнсә, мәктәп булараҡ, айырым иғтибарға алынып, шундай "изм" менән аталып йөрөтөлһә лә, ул кешелектең барлыҡҡа килеүе хаҡындағы етди әһәмиәтлә дәүгә иткән сығанаҡ булып ҡабул ителмәне. Дин әһелдәре Дарвин үҙе иҫән саҡта ла, әле булһын уны еретиклыҡта, әйгни мөртәтлектә гәйепләй. Сөнки маймыл менән кешенең тышҡы оҡшашлығын ғына нигеҙ итеп алған теория ваҡыт һынауын үтә алманы. Беренсенән, тышҡы оҡшашлыҡтан тыш, фән уларҙың башҡа уртаҡлыҡтарын таба алманы, икенсенән, таш быуаттан алып бөгөнгә тиклем бер генә маймылдың да кешегә әүерелеүенә шаһит түгелбеҙ. Бөгөнгө фән, киреһенсә, әҙәм балаһының Ергә ғаләмдәге башҡа планетанан килеүен раҫлай. Кешеләрҙең Ергә килгәнгә тиклемге йәшәү урыны быға тиклем Марс тип иҫәпләнһә, һуңғы фәнни асыштар Сириусты күрһәтә. Әҙәм балаһының Ерҙә килмешәк кенә булыуының тағы бер иҫбатламаһы: уның бындағы шарттарға башҡа тере йәндәргә ҡарағанда әҙерәк яраҡлашыуында ла. Әйтәйек, бүрене йә шул уҡ маймылды ҡая йә ағас башынан ергә ташла, уға бер ни булмаясаҡ, әҙәм балаһы иһә, был хәлдән һуң һөйәктәрен йыйып ала алмаясаҡ. Йә булмаһа, ҡояш нурында (боронғо дәүерҙә ҡояш нуры ифрат көслө булған) кеше тәненең яныуын һәм тиреһенең ҡойолоп төшөүен нисек аңлатырға? Дарвинсылар боронғо кеше маймылдан айырыла башлаған сағында уның тәне йөн менән ҡапланған булған, шуға күрә ул ҡояш нурына бирешмәгән, тип аңлатырға тырыша. Тик берәү ҙә был күренеште Гомо-сапиенстың деградацияға бирелеүе, тип әйтергә теләмәй. Ә энергетик тән рәүешендә Ергә Сириустан йә башҡа урындан килеп, балсыҡтан һәм һыуҙан матди тән рәүеше алған Әҙәм (был кешенең барлыҡҡа килеүе хаҡындағы дини аңлатмаға тура килә) ни рәүешле деградацияға бирелгән һуң? Дөрөҫ, Әҙәмдең бүреләрҙең төп ризыҡы булған иттән айыу иткәненән һуң башлана был процесс. Тап ошо саҡтан башлап бүреләр - кешеләрҙе, кешеләр бүреләрҙе үҙҙәренең дошманы иҫәпләй, дөрөҫөрәге, кешеләр бүреләрҙең өлөшөнә инеп, уларҙы үҙенә дошман итә. Бер генә йән эйәһе лә донъяға тере йән эйәһе кәрәк булған өсөн генә осраҡлы рәүештә яратылмай, уларҙың һәр ҡайһыһының тәғәйенләнеше була, тиҙәр. Ошо күҙлектән ҡарағандан, тереклекте Яралтыусы ни өсөн бүреләрҙе бар иткән һуң? Кем белә, бәлки, уларҙан һуң Ергә килеүсе Әҙәм балаһы иткә йоғонмаһын, кемдеңдер йәнен ҡыйырға ынтылмаһын, тип, был әмәлдә бүреләргә тапшырғандыр. Ибраһим бәйғәмбәр берҙән-бер улы Исмәғилде ҡорбан итер булғас, Хоҙай уның бысағын үтмәҫләтә һәм Ябраил фәрештә аша ҡорбанға ҡуй ебәрә. Ошо урында шундай һорау тыуа: был мәлгә тиклем Әҙәм балаһы ниндәй ит менән туҡланды икән? Ә бүреләр ни тиклем генә йыртҡыс булмаһын, бүре итен ашамай бит...

Бүреләргә килгәндә, уларҙың кешеләргә ҡарағанда күпкә алдараҡ Ергә аяҡ баҫыуы билдәле. Дөрөҫ, бүреләрҙән дә алдараҡ Ергә динозаврҙар һәм мамонттар килә. Боҙлоҡ дәүере, Туфан һыуы ҡалҡыуы һөҙөмтәһендә улар ҡырылып юҡҡа сыға. Шунан һуң тағы ла миллион йылдарҙан һуң Ергә йәшәү ҡайтҡас, унда төрлө хайуандар, шул иҫәптән бүреләр аяҡ баҫа. Улар бында аяҡ баҫамы, әллә ошонда яраламы - фән быны иҫбат итмәгән әле. Ошо урында тағы ла башҡорттарҙың бүреләргә эйәреп йөрөүе тураһындағы боронғо риүәйәтте иҫебеҙгә төшөрәйек. Бында риүәйәттең уйҙырма түгеллегенә ныҡлы нигеҙ бар. Ҡайһы бер ҡарһүҙҙәргә ҡарағанда, Әҙәм менән Һауаның балаларын иң башта Инә бүре имеҙә һәм ошо рәүешле Һауаға нисек итеп сабыйҙы туҡландырырға өйрәтә.

Бүреләрҙә ҡан тартыу көсө һәр ваҡытта ла шулай көслө булғанмы һуң? Юҡ, әлбиттә, ҡырағай тәбиғәт кешеләр тарафынан үҙләштерелеп, тауҙар сүгә, урмандар ҡола яланға әүерелә, климат үҙгәрә килә, бүрелек йөгөн күтәреп йәшәү ауырлашҡас, уларҙың бер өлөшө кешеләргә яҡынлашып, эт рәүешен ала һәм бүреләрҙең тағы бер дошманы арта. "Сағымдағы олоу"ҙа эттәр бүрелек традицияларына хыянат итеүселәр булараҡ та һынланып ала. Автор уларҙы ҡылыҡһырлағанда сарказм ҡулланһа ла, улар, ысынында, беҙ белгән ҡойроҡ болғауысы һәм донъяға мөнәсәбәтен өрөүе аша белдереүсе мәхлүк заттар. Эттәр тормошон автор бүреләрҙекенә йәнәш ҡуйып, уларҙың ни тиклем үҙ бүре асылын юғалтып, деградацияға бирелеүен бәйән итә. Беҙ, кешеләр, мәҫәлән, эттәрҙең бына ошондай сифаттарын кәмселек тип һанайбыҙ, ә бүреләр иһә эттәрҙең был ҡылыҡтарын хыянатҡа тиңләй:

-эттәрҙең "кәнтәйлек" асылы, йәғни кәнтәйҙәр бер юлы бер нисә арлан менән ҡарыйша, бүреләрҙә иһә, инә менән ата бүренең бер-береһенә тоғролоғо тоҡомға тоғролоҡ кимәлендә, ҡан хәтерендә нығынған;

-эттәрҙең көсөктәре алдындағы яуаплылығы нулгә тиң, улар хужа биргән ризыҡты үҙҙәре ашай, бүреләр иһә көсөгөн ашҡаҙанындағы ризыҡын ҡоҫоп булһа ла туйындыра;

-эттәр кешегә ярарға ғына түгел, уларға оҡшарға ла, улар һымаҡ аристократ булырға тырыша, шуға күрә уларҙа үҙ-үҙен һаҡлауға бәйле тәбиғи инстинкт юҡҡа сыҡҡан;

-эттәр кешегә һатылған бүреләр, беҙҙеңсә әйтһәк, бүре милләте "вирнайҙары", әммә улар нисек кенә кешегә ярарға һәм оҡшарға тырышмаһын, бер ваҡытта ла кеше булып китә алмаған һәм кире бүре хәленә лә ҡайта алмаған маргиналдар һ.б.

Автор үҙ әҫәрендә бүреләрҙең эттәргә дошманлыҡ мөнәсәбәтен ошо рәүешле белдерә: "Кәнтәйҙең тәүге минуттарҙа сайылдауы, әҙ генә һуңғараҡ ғырылдап шыңшыуы уның яҙмышының хәл ителгәнен башҡаларға еткерҙе. Ә Тупыс донъялыҡта үҙенә, үҙ тоҡомона бөлгөнлөк килтереүсенә башҡа ҡорбандарына ҡарағанда аяуһыҙыраҡ һелкте лә һелкте. Бүренең эткә аяуһыҙ дошман булғанлығын нимә менән аңлатып була? Ҡыр мөхитенә, ҡыр ҡанундарына хыянат итеп, кешегә килеп һырыһып, тәбиғи үҙ ояһын ҡарамай, бүренең иң төп дошманы булған кешенең мәнфәғәтен һаҡлаған өсөнмө? Шулайҙыр. Әммә Тупыс өсөн был кәнтәй эт кәнтәй булғаны, киләсәктә эт тоҡомон арттырыусы булыуы менән тағы ла дошманыраҡ ине. Бик, бик ашағыһы килһә лә, ул кәнтәйҙән ерәнде. Хатта кәнтәй үлеп бөтөп, йәне барлығы билдәһен күрһәтмәһә лә, һелкте..."

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

**(Башы 16-сы һанда. Аҙағы бар.)**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓29 майҙан 1 июнгә тиклем Өфөлә сәнәғәт округтары һәм бәләкәй, урта бизнес өлкәһендәге хеҙмәттәшлек буйынса Рәсәй-Италия эш төркөмөнөң XX ултырышы үтәсәк. Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Йортонда ошо сараға әҙерлек һәм уны үткәреү буйынса ойоштороу комитетының киңәйтелгән ултырышы булды. Уны БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Салауат Сәғитов алып барҙы. Билдәләнеүенсә, ошо сарала ҡатнашыу өсөн Башҡортостанға 100-гә яҡын итальян эшҡыуары киләсәк. Өфөләге форум Италия бизнесмендарына республика менән яҡындан танышыу мөмкинлеге бирәсәк.

✓Байрам алдынан, 29-30 апрелдә, Йылайыр районының Юлдыбай ауылында яҙғы-йәйге туризм миҙгелен асыу тантанаһы үтәсәк. Был уңайҙан туристар Һаҡмар йылғаһы буйлап һалда ағып төшөргә ниәтләй. Былтыр ошондай уҡ сарала республика ҡалаларынан тыш, Екатеринбургтан, Пермдән, Ырымбурҙан, Силәбенән, Рәсәйҙең башҡа ҡалаларынан һыу туризмы менән мауығыусылар ҡатнашҡайны. Был йоланы дауам итеп, 29 апрелдә Йылайыр районындағы миҙгелде асыу тантанаһына Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән вәкилдәр йыйыласаҡ.

✓Өфөнөң Калинин районының яңы башлығы итеп һуңғы ваҡытта район башлығы урынбаҫары, ә унан алда "Өфө моторҙар эшләү производство берекмәһе" асыҡ акционерҙар йәмғиәтендә эшләгән Григорий Букреев тәғәйенләнде. Быға тиклем район менән 10 йылға яҡын етәкселек иткән Герман Мартынов отставкаға китте.

✓Еңеү көнөн билдәләү сиктәрендә "Георгий таҫмаһы" бөтә Рәсәй акцияһы старт алды. Ул 9 майға тиклем дауам итәсәк. "Георгий таҫмаһы" акцияһы тәүге тапҡыр 2005 йылда ойошторолдо. Проект тормошҡа ашырыла башлағандан алып, ойоштороусылар билдәләүенсә, унда донъяның унлаған иле ҡатнашҡан, бөтә донъя буйлап 60 миллиондан ашыу Георгий таҫмаһы таратылған.

✓Пассажирҙар ташыусы "Башавтотранс" дәүләт компанияһының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, 2012 йылдың 1 - 10 майында Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм инвалидтары ҡала эсендәге, ҡала яны һәм ҡала-ара автобустарҙа бушлай юл йөрөү хоҡуғынан файҙалана ала. Йөрөү күләме сикләнмәгән. Бушлай билет алыу өсөн кондукторға ветеран танытмаһын күрһәтеү ҙә етә.

**"Башинформ"дан.**

ТӨРЛӨҺӨНӨН

## ТАЛПАН ҺӨЖҮМ БАШЛАНЫ

**Көндәр ҡапыл йылынып китеү сәбәпле, быйыл талпан сезоны бик иртә башланды.**

Былтыр Гигиена һәм эпидемиология үҙәгенә апрель айы аҙағында, май башына ҡарай ғына талпан ҡаҙалыу айҡанлы мөрәжәғәт итһәләр, быйыл уларға алтынсы апрелдән алып пациенттар килә башлаған. 16 апрель көнөндә был үҙәктә бөтәһе 177 талпан тикшерелгән. Ете талпан энцефалитлы тип табылған. Май байрамдары етеп килгәндә "тешләнеүсе"ләр һаны артасаҡ ҡына, тип билдәләй белгестәр. Һәм талпан ҡаҙалған осраҡта ни эшләргә кәрәклеге буйынса кәңәштәр бирә:

● Ҡаҙалған талпанға үҫемлек йә камфора майы тамыҙып, ипләп кенә уны бөтөн килеш тартып сығарырға кәрәк. Әгәр ҙә талпанды үҙегеҙ сығара алмаһағыҙ, травмпунктҡа мөрәжәғәт итегеҙ, унда бушлай ярҙам күрһәтергә тейештәр.

● Талпанды һыуға мансылған мамыҡ һалынған герметик һауытҡа һалығыҙ.

● Республика Гигиена һәм эпидемиология үҙәгенә алып барырға. Ҡабул итеү ваҡыты көн дә 9.00-ҙан 16.00 сәғәткә тиклем (Шәфиев урамы, 7).

## ДИНИ МӘҘӘНИӘТ ДӘРЕСЕ

**БР Мәғариф министрлығында әйтеүҙәренсә, киләһе уҡыу йылынан мәктәптәрҙә дини мәҙәниәт нигеҙҙәре дәрестәре дүртенсе синыф уҡыусыларына бер йыл дауамында уҡытыласаҡ.**

Буласаҡ дүртенсе синыф уҡыусыларының ата-әсәләре араһында һорау алыу үткәрелгән дә инде. Һөҙөмтәләр буйынса, донъяуи этика нигеҙҙәре иң күп тауыш йыйған (74%), донъя диндәре тарихын уҡыусыларҙың дүрттән бер өлөшө өйрәнергә теләй (22,2%), ислам мәҙәниәтенә 3,6% өҫтөнлөк бирә, православие мәҙәниәте нигеҙҙәрен 1,8% кеше һайлаған.

Был предметтарҙы диндарҙар түгел, ябай уҡытыусылар уҡытасаҡ. Бының өсөн 2012 йылда бюджеттан 5 миллион һум аҡса бүленгән. 3093 уҡытыусы белемен камиллаштырасаҡ.

## ИҪКЕ МАШИНАҢДЫ ТАШЛА...

**Иҫке машинала йөрөү бынан һуң кеҫәгә арыу ғына һуғасаҡ. Сөнки чиновниктар транспорт өсөн һалымды экологик йыйымға алмаштырмаҡсы.**

РФ Сәнәғәт һәм сауҙа министрлығы илдәге транспорт өсөн һалымды экологик йыйымдар менән алыштырырға тәҡдим итә. Тик әлегә экологик нормалар ниндәй булыры билдәһеҙ. Халыҡтың иҫке транспортта йөрөп, авария хәле тыуҙырыуы һәм тирә-яҡ мөхитте, һауаны бысратыуы ошондай ҡарарға килтергән. Тәҡдим ҡабул ителә ҡалһа, 15 йылдан ашыу йөрөгән автобус һәм йөк машиналарын, 20-25 йылдан артыҡ хеҙмәт иткән шәхси автотранспорттарҙы файҙаланыу тыйыласаҡ, тип күҙаллана. Кешеләргә "копейка" автомобилендә йөрөүҙе тыйып булмай, әммә үҙҙәре үк баш тартырлыҡ шарттар тыуҙырырға мөмкин. Иҫке машиналарға һалымдың яңы төрө күпкә арттырыласаҡ. Дәүләт үтилләштереү программаһын төрҙәп, иҫке автомобиль өсөн 100-250 мең һум түләнәсәк, тигәнде планлаштырырға тейеш (транспорт төрөнә ҡарап, мәҫәлән, йөк машиналары өсөн күберәк түләнәсәк). Был аҡсаға яңы автомобиль һатып алырға мөмкин. Транспорт министрлығында Сәнәғәт һәм сауҙа министрлығы тәҡдименә ҡаршы түгелдәр. Бынан бер ни тиклем алда Хөкүмәт башлығы Владимир Путин да экологик йыйым идеяһын күтәреп сыҡҡайны.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

**Өфө ҡала округы Советы депутаттары ҡабул иткән законға ярашлы, баш ҡалала бәлиғ булмаған өс һәм унан күберәк балаһы, шулай уҡ инвалид балаһы булған ғаиләләргә бер тапҡыр бушлай ер участкалары бүленәсәк.**



# БУШЛАЙ ЕРГӘ...

## кем дәғүә итә?

Участкалар ҡала округының муниципаль милкенә ҡараған ер майҙанынан шәхси торлаҡ төҙөү өсөн бирелә. Ер алырға теләүсе гражданға иҫәпкә тороп өсөн ҡала округы хакимиәтенә ғариза яҙырға кәрәк. Документтар Өфөлә теркәлгән граждандарҙан ҡабул ителә. Әгәр ҙә кеше быға тиклем башҡа ҡалала йәки районда йәшәгән икән, элек йәшәгән урындан бушлай ер алғанмы, юҡмы икәне тикшереләсәк.

Федераль закон буйынса, бер тапҡыр бушлай бирелә торған ер майҙанының күләме 6 гектарҙан да кәм булмаҫҡа тейеш. Ҡала округы хакимиәтенең ер ресурстары буйынса идаралыҡ начальнигы Салауат Хөсәйенов: "Өфөлә һәр ғаиләгә яҡынса 10-ар гектар бүлергә ниәтләйбеҙ. Был осраҡта йорт һалырға ла, баҡса үҫтерергә лә мөмкинлек буласаҡ, - ти. - Ерҙе беҙ, кеше үҙенә шәхси торлаҡ төҙөһөн, тип бирәбеҙ. Әммә граждан ерҙе үҙ милке иткәс тә үҙе теләгәнсә файҙалана ала".

Әлегә ер алыуға ике мең кеше сиратҡа торған. Күбеһе - 1400 ғариза биреүсе - күп балалы ғаиләләр. Барлығы биш мең ғариза тапшырылыуы күҙаллана. Ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Ринат Сәғитов әйтеүенсә, эш ер бүлеп биреү менән генә сикләнмәйәсәк. Киләсәктә һыу, ут үткәреү мәсьәләләрен төрлө социаль программалар иҫәбенә хәл итеү күҙаллана.

- Ер участкалары сират буйынса июнь айынан алып бүленә башлаясаҡ. Сират килеп еткәс, гражданға ер участкаһының урыны, адресы, майҙан күләме күрһәтелгән хат ебәреләсәк. 30 көн эсендә граждан тәҡдим ителгән ер участкаһын алыуға ризалығы хаҡында ғариза яҙып хәбәр итергә тейеш. Ваҡытында яуап бирмәгән йәки ер участкаһынан баш тартҡан хәлдә граждан иҫәптән төшөп ҡаласаҡ. Әммә ул ғариза яҙып, ҡабаттан сиратҡа торорға хоҡуҡлы. Әгәр ҙә сират килеп етеү ваҡытына балаларҙың береһенә 18 йәш тулып өлгөрһә, ғаилә ер алыу хоҡуғын юғалта, - тип аңлатты хакимиәттең иҫәп алып барыу бүлеге начальнигы Зилә Мөхәмәтова.

ӘЙҘӘГЕҘ...



# ТАУЫШ БИРӘЙЕК:

## һеҙ бер яҡлы хәрәкәт өсөнмө?

**Өфөнөң Ленин урамындағы бер яҡлы хәрәкәт хаҡында тик ялҡауҙар ғына һөйләмәҫ. Кемдер хуплай, ә икенселәр, киреһенсә, ҡала округы хакимиәтенең был ҡарарына ризаһыҙлыҡ белдерә.**

Ысынлап та, Өфө үҙәгендә тығындарҙы юҡҡа сығарыу маҡсатынан эшләнгән бер яҡлы хәрәкәт ышанысты аҡламаны - тығындар элек нисек булһа, шул рәүешле ҡалды. Ә иртән эшкә ашығыусы кешеләргә туҡталыштар күсерелеү арҡаһында әллә күпме уңайһыҙлыҡ кисерергә тура килде. Шуға күрә ҡала үҙәгендәге бер яҡлы хәрәкәт проектының уңышһыҙ булыуын хәҙер бар кимәлдә лә таныйҙар. Күптән түгел был мәсьәлә Себер дәүләт автомобиль-юл академияһының Өфө филиалында тикшерелде.

- Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге яғынан бер яҡлы хәрәкәт яҡшы, сөнки ҡаршы килеүсе транспорт юҡ, ә икенсе яҡтан иһә, был тығындар һәм уңайһыҙлыҡтар тыуҙыра, - тине академия уҡытыусыһы Алим Вәлиев.

Өфө ҡала округы хакимиәтенең юл хәрәкәтен ойоштороу бүлеге етәксеһе Ғәфүр Ҡылызбаев белдереүенсә, был хәлде яйлау өсөн Санкт-Петербург ҡалаһы проектлау институтынан саҡырылған белгестәр кәрәкле тикшереү уҙғарған һәм яҡын арала үҙ тәҡдимдәрен әйтәсәк, ләкин был ҡарарҙың ниндәй һәм ҡасан булыры әлегә билдәһеҙ.

Ҡала округы хакимиәте баш ҡала халҡын Өфөнөң тарихи үҙәгендәге Ленин, Гоголь, М.Кәрим, Чернышевский һәм башҡа урамдарҙағы юл хәрәкәтен яйлау буйынса үҙ тәҡдимдәре һәм фекерҙәре менән уртаҡлашырға саҡыра. Бының өсөн 26 апрелдән 31 майға тиклем ҡала хакимиәтенең **opros@ufacity.info** электрон адесына, 277-09-11 ҡыҙыу телефон номеры аша "Мэрия" абонентына үҙ тәҡдимдәрегеҙ менән хәбәр ебәреү кәрәк. Телефон аша хәбәр ебәреүсе үҙенең тулы исем-фамилияһын һәм адресын әйткән осраҡта ғына ҡабул ителә. Шулай уҡ Өфө ҡалаһы хакимиәтенең **www.ufasity.info** адреслы рәсми сайтында "Бер яҡлы хәрәкәт" исемле асыҡ форумда ла фекерҙәрҙе еткерергә мөмкин. Шунда уҡ "Һеҙ Өфөнөң үҙәгендә (Ленин, Гоголь, М.Кәрим, Чернышевский һәм башҡа урамдар) бер яҡлы хәрәкәт индереүҙе яҡлайһығыҙмы?" тигән һорау алыуҙа ла ҡатнаша алаһығыҙ.

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓1 майҙа 12 сәғәттә Өфө скверҙарында, мәҙәниәт һәм ял парктарында ҡала фонтандары асыласаҡ. "Фонтандар байрамы" сиктәрендә концерттар, төрлө тамашалар үткәреү, ҡаланың ижади коллективтары һәм ансамблдәре сығыштары планлаштырылған. Байрам саралары өлкәндәр ҙә, балалар ҙа ҡатнаша ала. Иң әүҙем бәләкәй өфөләләргә бүләктәр тапшырыласаҡ.

✓24 апрелдән Башҡортостанда, бөтөн Рәсәйҙәге кеүек үк, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарына Рәсәй Президентының Еңеүҙең 67 йыллығы менән шәхси ҡотлауҙарын алып барып еткереү буйынса күләмле эш башланды. Рәсәй Президенты ҡотлауҙарын почтальондар адресаттарҙың ҡулына тапшыра, әммә ҡотлауҙы алғанда ҡултамға ҡуйыу мотлаҡ түгел. Улар 30 апрелгә тиклем тапшырылып бөтәсәк. "Рәсәй Почтаһы" хеҙмәткәрҙәре исемле ҡотлауҙарҙы тапшырмайынса ҡалмаясаҡ, кәрәк булһа, ветерандарҙың яңы адрестарын асыҡлаясаҡ.

✓Өфө хакимиәте һәм "Молодежная газета" редакцияһы Өфөлә Еңеүҙең 67 йыллығына арналған Асыҡ еңел атлетика эстафетаһы үткәрә, шул сәбәпле 6 майҙа иртәнге сәғәт 10-дан төшкө 2-гә тиклем ярыштар үткән урындарҙа автотранспорт хәрәкәте туҡтатыласаҡ. Ярыштар Зәки Вәлиди - М.Ғафури - Пушкин - Совет урамдары маршруты буйынса үтәсәк. Старт һәм финиш - "Динамо" стадионында (К. Маркс, 2). Ҡатнашыусыларҙың парады сәғәт 11-гә билдәләнгән.

✓Рәсәйҙең төньяҡ баш ҡалаһында Башҡортостан Республикаһының Санкт-Петербургтағы Даими вәкиллеге ярҙамында "Башҡортостан" сауҙа йорто асылды. Тантаналы сарала, республика парламенты спикеры Константин Толкачев етәкселегендәге рәсми делегациянан тыш, ҡала хакимиәте һәм йәмәғәтселек вәкилдәре ҡатнашты. Сауҙа йорто бинаһы тарихи үҙәктә, Мәскәү вокзалынан алыҫ түгел Саперҙар тыҡрығы, 16/36 адресы буйынса урынлашҡан. Ул Башҡортостан етештереүселәренең тауарҙарын һәм хеҙмәттәрен тәҡдим итеү маҡсатында булдырылды. Сауҙа йортонда шулай уҡ республиканың шифаханалары һәм ял йорттарына путевкалар һатыла.

✓Нефтекама "Торос"ы Төмәндең "Рубин"ында ҡунаҡта Юғары хоккей лигаһының 2012 йылғы плей-оффындағы бишенсе финал матчында еңеү яуланы - 2:1. Шулай итеп, Башҡортостан клубы Братина Кубогын алды.

✓ *Беҙҙә эсеүгә ҡаршы закон тарафынан ҡәтғи талаптар ҡуйылған. Шуға күрә йәштәр 20 йәшкә хәтлем һыра-фәлән эсмәй. Һаулыҡ һаҡлауға, спортҡа етди иғтибар бүленә. Әммә беҙҙә ғаиләне иртә ҡормайҙар.*



СИТТӘР МЕНӘН ӘҢГӘМӘ

# НИ ӨСӨН БЕҘ...

## коммунизм төҙөмәнек?




**Минең алда мөләйем генә йылмайып, ҡаҡса кәүҙәле бер ҡыҙ ултыра. Беҙҙең яҡтарға, алыҫ араны яҡын итеп тигәндәй, Франциянан килеп еткән икән был ҡыҙ бала. Исеме - Южени Кати. Уға 22 йәш. Рәсәйҙә тәү тапҡыр. Юғары уҡыу йортонда уҡып йөрөй. Насип итһә, урман белгесе булып сығасаҡ икән. Бына әле ошо француженка менән һөйләшеп ултырам.**

Унын менән аралашҡанда шул күҙгә салынды: бирелгән һорауға яуапты Южени (был әлләә фамилияһы, әлләә исеме, матур яңғыраған шулай яҙып ҡуйҙым әле) "Был минең шәхси фекерем", тип баҫым яһап белгертеп ҡуя. Шулай тәрбиә алаларҙыр инде сит илдә. Ә беҙ ней, ҡолас ташлап талашып, бәләкәйҙән үк үҙ һүҙебеҙҙе бирмәҫкә өйрәнәбеҙ. Хатта мәҡәл дә бар бит әле был турала. Үҙһүҙле кеше тураһында һүҙ сыҡһа, әллә нимәһен бирһә бирер (варианттары күп халыҡ араһында), әммә үҙ һүҙен бирмәҫ, тип ебәргән булабыҙ. Ярай, ситкә тайпылмайыҡ әле, француженка менән әңгәмәне һеҙгә лә еткерәйем тип сыймаҡлағайным бит был мәҡәләмде.

Южени Катины беҙҙең тарафтарға ниндәй елдәр алып килеп ташланы икән - был, әлбиттә, тәүге һорауым булды.

**- Әйтегеҙ әле, Рәсәйгә, төбәп әйткәндә Башҡортостанға, һеҙ нисек килеп юлыҡтығыҙ?**

- Рәсәй күптәр өсөн һәр ваҡыт мауыҡтырғыс, шул уҡ ваҡытта серле ил булып ҡала килә. Ә мине инде тәү сиратта Рәсәй белгес булараҡ ҡыҙыҡһындырҙы. Беҙҙә бит тәбиғи урмандар юҡ тип әйтерлек. Шуға күрә һеҙҙең илдең сайтына инеп, 40-ҡа яҡын ҡурсаулыҡ-парк исеменә хат яҙып ебәрҙем. Әйтергә кәрәк, бөтәһе лә яуап бирҙе. Ә мин инде үҙ сиратымда Шүлгән-Таш ҡурсаулығын һайланым.

**- Рәсәй ни өсөн серле ил булып иҫәпләнә икән? Ошо турала тулыраҡ аңлатһағыҙ ине.**

- Берҙән, һеҙҙең ил үтә ҙур. Бындай ҙур ил менән нисек идара итергә мөмкиндер, быны беҙгә аңлауы ҡыйын. Икенсенән, һеҙҙең илдә күп милләт йәшәй. Ошо төрлө милләт халҡының нисәмә быуаттар буйына татыу йәшәй алыуы ла беҙгә аңлашылмай. Өсөнсөнән, һеҙ Гитлерҙы һәм Наполеонды еңгән ил!

*Тәүге ике дәлил ниндәйҙер кимәлдә көтөлгән яуап булды, әлбиттә. Ә бына өсөнсөһө мине бер аҙ аптырауға һалды. Шуға күрә мин был турала һорамайынса булдыра алманым.*

**- Бындай һығымтаны һеҙ үҙегеҙ яһанығыҙмы, әллә мәктәптә ошолай уҡыталармы?**

- Дәреслектәрҙә, әлбиттә, былай тип яҙылмаған. Әйтәйек, мине мәктәптә, Икенсе бөтә донъя һуғышында Рәсәйҙең һәм Американың еңеүгә индергән өлөшө бер сама, тип уҡыттылар. Әммә беҙҙә теләгән һәр кем китапханаларға барып, үҙен ҡыҙыҡһындырған һорауҙарҙы, тарихта булған сетерекле хәлдәрҙе айырым өйрәнә ала. Күптәр шулай эшләй ҙә. Бына мин дә тарихи мәғлүмәттәргә таянып, ышаныслы әйтә алам: заманында фашизмды бары тик Рәсәй генә туҡтата алған!

*Бындай яуапты ишеткәс, миңә, нишләптер, рәхәт булып китте...*

**- Белгес булараҡ, һеҙгә беҙҙең урмандар нимәһе менән ҡыҙыҡлы?**

- Беҙҙең урмандар һеҙҙең урмандарҙан бөтөнләйе менән айырыла. Беҙҙә урмандың һәр ағасы иҫәптә тора. *(Мин ышанмайыраҡ уға ҡарап алам).* Беҙҙә урмансыға ағас иҫәпләп бирелә. *(Беҙҙә хөрриәт икән - урмансыға урман гектарлап бирелә).* Кәрәкмәгән йәиһә ауырыу ағас шунда уҡ урмандан киҫеп алына, ә урынына кәрәкле ағас ултыртыла. Кәрәкле ағас булып беҙҙә ҡарағай, имән, тополь *(тиҙ үҫкәне өсөн икән)* һәм муйыл иҫәпләнә. Урман дәүләт тарафынан ныҡ һаҡлана. Ә һеҙҙәге һымаҡ йәйрәп ятҡан тәбиғи урмандар *(француженка ҡулдарын йәйеп бер аҙ һоҡланып тора)* беҙҙә ғүмерҙә лә булмаясаҡ.

**- Бындай алыҫ сәфәргә яңғыҙ сығырға нисек батырсылыҡ иттегеҙ?**

- Европала сит илгә сәфәргә сығыу ҡәҙимге күренеш һымаҡ ҡабул ителә. Йома-ял көндәре күрше илгә барып ҡайтыу бер ниндәй ҡыйынлыҡ тыуҙырмай. Әлбиттә, Рәсәйгә сығыусылар һирәгерәк. Бына мин тәүәккәлләп сыҡтым да киттем һеҙҙең илгә. Өмөттәрем тулыһынса аҡланды. Урман белгесе булараҡ, күп мәғлүмәт алдым. Ысын урманды күрҙем. Әле бына тәбиғәттең уртаһында ял итеп ултырам.

**- Ә урындағы халыҡ ниндәй тойғолар ҡалдыра һеҙҙә?**

*Әлбиттә, һәр ҡунаҡ бындай һорауға яуапты күп осраҡта бер үк төрлө бирә. Маҡтап ебәрәләр, һоҡланған булалар. Йүкә шына ҡаталар инде шунда. Ә бына Южени Катиның үҙ фекере бар икән.*

- Бер аҙна аралашҡандан һуң күптәрҙең белем кимәленең юғары булыуына инандым.

**- Ә был нимәлә сағыла һуң?**

- Мин күп илдәрҙә булдым. Әйтәйек, бына Америкала күптәр хатта Францияның ҡайҙа урынлашҡанын да белмәй. Уларҙы мин наҙан тип әйтмәҫ инем. Бары тик уларға башҡа илдәр тураһында мәғлүмәт кәрәкмәй. Шуға күрә улар ҡыҙыҡһынмайҙар ҙа. Ә һеҙҙә белемгә ҡарата ниндәйҙер ынтылыш бар. Башҡа илдәр менән сағыштырғанда, һеҙҙең илдә мәктәпбелем биреү системаһы ла күпкә айырыла бит.

**- Ә шулай ҙа ҡунаҡтың күҙенә кире яҡтарыбыҙ ҙа салыналыр бит инде?**

*Ҡытыршылыҡтарҙы Кати оҫта ғына урап үтеп китте, буғай.*

- Беҙҙә эсеүгә ҡаршы закон тарафынан ҡәтғи талаптар ҡуйылған. Шуға күрә йәштәр 20 йәшкә хәтлем һыра-фәлән эсмәй. Һаулыҡ һаҡлауға, спортҡа етди иғтибар бүленә. Әммә беҙҙә ғаиләне иртә ҡормайҙар. 30 йәшкә хәтлем яңғыҙ йөрөүҙе хуп күрәләр. Балалар ҙа күп булмай беҙҙең ғаиләләрҙә.

*Һөйләшеү тамамланыуға барғанда, Кати ҡапыл һорай ҡуйҙы.*

**- Ә һеҙгә һорау бирергә мөмкинме?**

*Мин бер аҙға баҙап ҡалдым. Баштан төрлө уйҙар үтеп китте. Ә шулай ҙа ниндәйерәк һорау бирер икән француженка?Мин ҡыҙыҡһынып уға төбәлдем.*

**- Нишләп Рәсәй коммунизмды төҙөп бөтмәне?**

*Бындай һорауҙы мин бер ҙә көтмәгәйнем. Шулай ҙа яуап бирергә тырыштым. Һиҙеп торам, ышанырлыҡ килеп сыҡманы, буғай.*

*Ә һеҙ нисек яуап бирер инегеҙ, хөрмәтле гәзит уҡыусылар: ысынлап та, беҙ нишләп коммунизм төҙөмәнек икән?*

**Әғләм ШӘРИПОВ.**
**Бөрйән районы.**

ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# СТУДЕНТ ТА...

## эшһеҙ тормаһын



**Студенттарҙың сосорағы, үткереҙәге күп осраҡта өйҙән ебәрелгән аҡсаға һәм стипендияға ҡушымта булырлыҡ өҫтәмә килем хаҡында ҡайғырта. Кемдер уйлап-уйлап, уйҙары осона сыға алмайынса уҡыуын да тамамлап ҡуя, икенселәр иһә тиҙ-тиҙ генә ысулын да, әмәлен дә табып, матур итеп эшләргә лә, һәйбәт итеп уҡырға ла өлгөрә. Әлбиттә, даими эш табып, күп ваҡытыңды уға бүлеү уҡыуға ҡамасауларға мөмкин, шуға күрә күптәр ваҡытлыса, бер тапҡыр башҡарыла торған эш табыу әмәлен эҙләй.**

Мин дә үҙ тәжрибәм менән уртаҡлашырға булдым. Аҡса эшләүҙең беренсе юлы - төрлө магазин, ресторан, автомобиль салондары һәм башҡа ойошмаларҙың йәки эшҡыуарҙарҙың реклама ҡағыҙҙарын, йәғни флаерҙарын урамда таратыуҙан йәки почта йәшниктәренә һалып сығыуҙан ғибәрәт. Эш ауыр ҙа түгел, әҙме-күпме аҡсаһы ла килә. Ниндәй ойошмаға йәки эшҡыуарға эшләүемә ҡарап, көнөнә 500-1000 һум аҡсаны кеҫәгә һалам. Тәүҙәрәк башҡарған эшем өсөн аҡса ала алмайынса алданған саҡтар ҙа булды, шуға күрә хәҙер үҙем белгән, ышаныслы кешеләр менән генә эш итәм. Ғөмүмән, бер ниндәй килешеүһеҙ эш биргәндәрҙән алыҫыраҡ торорға кәрәк, сөнки бөгөнгө заманда ташҡа баҫылған һүҙ генә законлы көскә эйә, ә телдән бирелгән вәғәҙәгә генә ышанырға ярамай. Килешеү төҙөүҙе һорауҙан ояларға ла, ҡурҡырға ла кәрәкмәй, әгәр килешеү төҙөүҙе кисектерергә тырышалар икән, тимәк, һин мутлашыусыларға килеп юлыҡҡанһың.

Икенсе ысул - төҙөлөш ойошмаларына яллаһып, объекттарҙы сүп-сарҙан таҙартыу. Йорттоң йәки ниндәйҙер офистың каркасы ҡалҡып сыҡҡандан һуң эске төҙөлөш эштәрен башлағансы уны тулыһынса таҙартып сығыу мөһим. Нәҡ ошондай сакта төҙөлөш ойошмаларына студенттарҙан торған бригадалар ярҙамға килә. Студенттарҙы яллау, беренсенән, күпкә арзанға төшә, икенсенән, улар эшкә әрһеҙ, йәшлектәренә барып, иҫәпләшеп-һанлашып тормай, емертеп эшләй. Бер тапҡыр эшкә етди ҡарауынды күрһәтһәң, төҙөлөш ойошмаһы етәксеһе гелән һеҙҙең бригадаға мөрәжәғәт итәсәк. Ҡала төҙөлөш эштәренең күпләп алып барылыуын иҫәпкә алғанда, беҙҙең эшһеҙ, тимәк, аҡсаһыҙ ултырғаныбыҙ юҡ. Әлбиттә, эш енелдән түгел, яны биналарҙа лифт юҡ һәм өҫкө ҡаттан аҫҡа сүп-сар ташып, кискә хәлһеҙ ҡайтып йығылабыҙ. Ләкин матур әйбер кейәм, тәмле итеп ашайым, тимәк, түҙергә тура килә инде. Бына ошондай ысулдар менән мин үҙемә аҡса эшләйем. Күберәген ял көнө йәки дәрестәрҙән һуң эшләгәс, уҡыуыма ла ҡамасауламай, кеҫәлә һәр ваҡыт аҡса ла бар.

**Илгиз ВӘЛИЕВ.**

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

## Ашҡаҙан сей яраһы



❖1 ҡалаҡ ваҡланған андыҙ тамырын 200 мл ҡайнар һыуҙа төнәтергә. Көнөнә өс тапҡыр, ашағандан һуң 1-әр ҡалаҡлап эсергә. Ашҡаҙан һәм бөйән эсәге сей яралары ваҡытында ҡулланыла;

❖7 ҡалаҡ етен орлоғон кәстрүлгә һалып, өҫтөнә 2 литр һөт ҡойоғоҙ. Ҡайнау хәленә килтерергә һәм талғын утта ҡайнап ултырған һыулы һауытта 10 минут төнәтегеҙ. Һыуытырға, марля аша һөҙөргә, төнәтмәне һыуытҡыста һаҡларға. Көнөнә өс тапҡыр ашар алдынан 30-40 минут алда 1-әр стаканлап эсергә. Әҙерләнгән төнәтмә ике көнгә етәсәк. Дауалау курсы 1,5-2 ай;

❖1 йомортҡа ағы, 1 балғалаҡ шәкәр онтағы, 1 ҡалаҡ зәйтүн майынан крем эшләргә. 10 көн дауамында һәр иртә ас ҡарынға 1-әр ҡалаҡ ҡабул итергә. Шулай уҡ ашар алдынан 30-40 минут алда 1 балғалаҡ һырғанаҡ майы ҡабул итегеҙ;

❖өс литрлы банкаға ваҡлап туралған андыҙ һалып, ҡайнар һыу ҡойоғоҙ, тик 2 стакан һыу һәм әсеү өсөн урын ҡалдырығыҙ. Бүлмә температураһына тиклем һыуытырға. Ошо уҡ банкаға 1 стакан ҡомалаҡ сүпрәһе һәм 1 стакан шәкәр өҫтәргә. Йылы урында өс тәүлек төнәтергә. Һуңынан һөҙөп, көнөнә өс тапҡыр стакандың өстән бер өлөшө күләмендә эсергә. Дауаны 10 көн дауам итергә, кәрәк булғанда тағы ҡабатларға. Гастриттарҙы, хатта аҙған сей яраларҙы дауалай;

❖20 г һары мәтрүшкә сәскәһенә 1 стакан зәйтүн майы ҡойорға һәм 40 көн төнәтергә. Ашарҙан ярты сәғәт алда көнөнә 2-3 тапҡыр 1-2 балғалаҡлап ҡабул итергә;

❖1-2 ҡалаҡ балан емешен иҙеп, өҫтөнә 200 мл ҡайнар һыу ҡойорға, 4 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 3-4 стакан эсергә;

❖10 көн буйы ашарҙан 0,5 сәғәт алда ярты стакан картуф һуты эсергә. 10 көн ял итеп алғас, тағы ҡабатларға;

❖иртә яҙ ярты литрлыҡ банкаға ҡайын бөрөһөн йыйып, араҡы ҡойорға. 1 аҙна ҡараңғы урында тоторға. Төнгөлөккә десерт ҡалағы менән ҡабул итергә. Тәжрибәләр күрһәтеүенсә, ашҡаҙан яраһы 20 көн эсендә бөтәшә. Дауаланған осорҙа асығып йөрөргә кәнәш ителмәй. Дарыу оҙаҡ боҙолмай һаҡлана.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

✓ *"Башҡорт форумы" ағзалары ише фекерҙәргә яуап ҡайтармаҫҡа тигәнде ҡағиҙә итеп алған һәм бөгөн ул төрлө бысраҡ хәбәрҙәрҙән азат интернет-майҙанға әйләнгән. "Башҡорт форум"ында бөгөн 2500-ләп кеше теркәлгән.*



*ФЕКЕР ҠОРО*

**Ошо көндәрҙә ҡала урамында бала саҡ дуҫымды осраттым. Күптән күрешкән юҡ ине, барлыҡ яңылыҡтар менән уртаҡлашып бөткәс, һүҙ интернет-ресурстар хаҡында киткәс, ул ҡапыл: "Беҙҙең бала саҡ күңелле булған, хәҙерге балалар урамға ла сыҡмай, компьютерға текәлеп тик ултыра…" - тип һуҡранды. Ысынлап та, бөгөн үсмерҙәрҙе, йәштәрҙе интернет менән мауығыуҙары өсөн туктауһыҙ битәрләй өлкәндәр. Тик бындай мауығыу бөтә донъя балаларын һәм йәштәрен ялмап алғанда, беҙҙекеләр замандан артта ҡалырға тейешме һуң? Бәлки, был мәсьәләгә башҡа күҙлектән сығып ҡарарға кәрәктер?**

# ИНТЕРНЕТТАҒЫ АРАЛАШЫУ...

## башҡортса һәм рухлы булһын

Интернет селтәрендә төрлө сайт, форумдар, төркөмдәр, блогтар бихисап. Улар араһында балаға, йәштәргә файҙалыһы ла, зыянлыһы ла етерлек. Файҙалы, сөнки интернетта барлыҡ һорауҙарыңа яуап, барлыҡ темалар буйынса мәғлүмәт табып була. Шул уҡ ваҡытта, интернет селтәрендә кәрәккәндән кәрәкмәгәне күберәк, тип әйтеүселәр ҙә хаҡлы кеүек. Көнө-төнө ниндәйҙер мәғлүмәти сайттар, киномузыка, һүрәттәр ҡарап ултырыуҙың бала психикаһына кире тәьҫир итеүе тураһында ла миҫалдар бихисап. Ғөмүмән, был проблема бар һәм уны хәл итеү юлдарын эҙләргә кәрәк. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты Киң мәғлүмәт саралары комиссияһының сираттағы ултырышы тап ошо интернет ресурстарҙы дөрөҫ ҡулланыу, интернет селтәрендә башҡортса аралашыуҙы киңәйтеү проблемаһына арналды ла инде. Әгәр ҙә йәштәребеҙҙе, балаларыбыҙҙы интернеттан айырырлыҡ көс тапмайбыҙ икән, тимәк, беҙгә унда рухи ем, ғәм, сәм урынлаштырырға кәрәк, тигән фекер осрашыуҙың төп маҡсатын билдәләне. Унда республикабыҙҙың иң билдәле блоггерҙары, форумсылары, "Бәйләнештә" сайтында ҡатнашыусылар, интернет-журнал авторҙары ҡатнашты, үҙҙәре менән таныштырҙы.

Америка закондарына нигеҙләнеп йәшәп килгән "Тере журнал" блог-платформаһында үҙ блогын алып барыусы, шағир, яҙыусы, драматург Айҙар Хөсәйенов һәм башҡорт теле уҡытыусыһы Светлана Иҫәнголова блоггерҙар эше менән таныштырҙы. "Блоггер булыу өсөн фекерләй белеү бик мөһим. Мин бөгөнгө көндә блогымда сит өлкәләрҙә, сит илдәрҙә булған хәлдәр менән ҡыҙыҡһынған кешеләр өсөн мәғлүмәттәр урынлаштырам. Әлегә күпселек блоггерҙарыбыҙҙа аралашыу мәҙәниәтенә ете-шмәй. Улар башлыса теге йәки был проблема тураһында ҡысҡырыу, яр һалыу менән мәшғүл. Быны беҙ бала саҡта ниндәйҙер торба табып алып, шуға алмаштилмәш ҡысҡырып ҡарауыбыҙ менән сағыштырыр инем. Ваҡыт үтеү менән был ҡылығыбыҙ үтер, тигән ышаныстамын. Әле беҙ һөйләшә, аңлаша, фекерҙәребеҙҙе бер-беребеҙгә еткерә белмәйбеҙ. Блог үҙ наҙанлығыңды, аҡыллылығыңды күрһәтеү һәм кешеләрҙе көлдөргәндән һуң, ниндәй булырға кәрәкмәгәнлекте аңлау өсөн уңайлы платформа,"- тип белдерҙе Айҙар Хөсәйенов.



"Тере журнал" мәктәбен үткәндән һуң, башҡорт теле уҡытыусылары Светлана Иҫәнголова һәм Әлфиә Әбделмәнова башҡорт телендә "Остаз" интернет-журналы аса. Төп маҡсаттары -башҡорт теле уҡытыусыларына уҡытыу эшендә ярҙам итеү, борсоған мәсьәләләрҙе уртаға һалып һөйләшер майҙан булдырыу. "Остаз" интернет-журналына инеп, һәр теләгән кеше башҡорт телен уҡытыуға ҡағылышлы яңылыҡтар, кәңәштәр, тәжрибә алып һәм бүлешеп сыға ала. "Бөгөнгө көндә журналыбыҙҙы сит өлкәләрҙән һәм сит илдәрҙән дә уҡыйҙар, үҙ комментарийҙарын ҡалдыралар, аңламағандар башҡорт теленән текстарҙы тәржемә итеүебеҙҙе һорайҙар,- ти Светлана. - Быға тиклем, мәҡәлән, "Тере журнал"да башҡорт теленә, уны уҡытыуға ҡағылышлы кире комментарийҙар, негатив фекерҙәр күп булһа, "Остаз"ға инеп, ундай фекерҙәр белдереүселәр юҡ. Тимәк, һәр урында башҡорт телен ыңғай яҡтан пропагандалау кәрәк".

Интернет селтәрендә блог, журналдарҙан тыш, ниндәйҙер айырым темаға ҡарата һөйләшеү өсөн форумдар бар. Блог - ул интернет-көндәлек, ваҡиғалар интернет-журналы булһа, форумда ҡатнашыусылар иһә комментарий яҙыу менән генә сикләнмәй, ә үҙ материалын да урынлаштыра ала. Республикабыҙҙа иң үҙ форумдарҙың береһе - "Башҡорт форумы". Уның модераторы Рөстәм Баязитов бөгөнгө көндә "троллинг" тип аталған бер-беренә бысраҡ яғыу күренешенән ҡотола алыуҙары хаҡында һөйләне. Форумда ни тиклем күберәк кире фекерҙәр яҙыла, ни тиклем күберәк бысраҡ һүҙҙәр әйтелә, форум шул тиклем популярлыҡ яулай, тигән ҡараш бар. Әммә "Башҡорт форумы" ағзалары ошо ише фекерҙәргә яуап ҡайтармаҫҡа тигәнде ҡағиҙә итеп алған һәм бөгөн ул төрлө бысраҡ хәбәрҙәрҙән азат интернет-майҙанға әйләнгән. "Башҡорт форум"ында бөгөн 2500-ләп кеше теркәлгән.

Кем башҡорт телендә "Википедия" ирекле энциклопедияһы барлығын белә ине? Баҡтиһәң, башҡорт телендә мәҡәләләр, мәғлүмәттәр баҫтырылған был энциклопедия үҙ эшен 6-7 йыл алып бара икән. Ул инде донъялағы 282 телдә яҙылған "Википедия"лар араһында 95-се урында килә, Рәсәй халыҡтары араһында - урыҫ "Википедия"һынан ҡала 2-се, төрки телле халыҡтар "Википедия"һы араһында 3-сө урынды биләй. Башҡортса ирекле энциклопедия төҙөүселәр Рөстәм Нуриев, Зөфәр Салихов, ошо рәүешле беҙ донъяның интернет- майҙанына сығабыҙ һәм халҡыбыҙҙы, телебеҙҙе унда танытабыҙ, тигән изге маҡсат ҡуйған үҙ алдына. Был энтузиастар менән ошо көндәрҙә гәзит биттәрендә айырым һөйләшеү буласа҆ҡ.

Бөгөнгө көндә интернет селтәрендә аралашыусы, фекер алышыусылар араһында иң ҙур төркөмдә тәшкил итеүселәр "Бәйләнештә" сайтында теркәлгән. Әйткәндәй, хәҙер хатта башланғыс синыф уҡыусыларының да был сайтта үҙ бите бар. Был - факт, һәм уны инҡар итеп булмай. Тап ошо балаларға "рухи ем" ырғытырға кәрәк тә инде. "Балалар өсөн башҡортса әҫәрҙәр" төркөмө етәксеһе Гүзәл Ситдиҡова әйтеүенсә, балаларҙы интернетка инеүҙән тыя алмағас, беҙ уңа аудио-вариантта башҡортса йәнһүрәттәр, кескәйҙәр өсөн йырҙар, башҡорт халыҡ әкиәттәре урынлаштырырға тейешбеҙ. Әлеге көндә тотош интернет селтәрендә бындай материалдар һирәк, йә бөтөнләйгә юҡ. Шулай уҡ йәштәр менән тәрбиәүи эш алып барыуҙы "Дуҫтар исемлеге"нә индергән ваҡыттан уҡ башларға кәрәк. Кемдең интернет битендә оятһыҙ яҙыуҙар, килешмәгән нәмәләр бар, уларҙың дуҫлығын ҡабул итер алдынан ошо хаталарын төҙәтеүҙе талап итергә мөмкин.

Тәрбиәүи эштәрҙе кешенең кәйефен, күңел торошон белдергән афоризмдар, төрлө һүҙҙәр, фотоһүрәттәр, шиғри юлдар, аудио-видео яҙмалар рәүешендә алып барыусы "Башҡортса статустар" төркөмө туған телебеҙҙе һәм туған телдә аралашыуҙы "Бәйләнештә" сайты буйлап таратыуҙы күҙ уңында тотоп эшләй. Бөгөнгө көндә "Башҡортса статустар" төркөмөндә 15 мендән ашыу кеше теркәлгән. Шулай уҡ төркөм етәкселәре башҡорт телендә төрлө файҙалы, ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр еткерә, башҡорт сараларына иғландар бирә, хатта һорау алыуҙар ҙа уҙғара. Был төркөмдө булдырыусы Минзәлә Аҫҡарова һәм уның ярҙамсылары - студенттар.

"Бәйләнештә" сайтында "Башҡортса статустар"ҙан ҡала килә иң ҙур төркөмдәрҙең береһе - "БашАрт" компанияһы" бите. Унда 14 мең ярымдан ашыуыраҡ ҡатнашыусы теркәлгән. Был төркөм етәкселәре Артур Батыршин һәм Заһир Ишкинин башҡортса яҙыулы футболкалар, толстовкалар, яҫтыҡтар, туй плакаттары һәм башҡа әйберҙәрен интернет-магазин аша республикала йәшәүселәргә генә түгел, бар Рәсәйгә тарата. Егеттәр башҡорт телендә яҙылған әйберҙәр аша туған телен, милли рухты йәштәр араһында пропагандалауҙы алға һөрә. Үҙебеҙ генә ошондай әйберҙәр кейеп, башҡаларға ла мөмкинлек бирмәнәк, беҙҙән йәмғиәтебеҙгә файҙа булмаҫ ине, тигән фекерҙә улар. "БашАрт" компанияһы" төркөмөнән тыш, егеттәр ваҡытында "Башҡортса граффити" - башҡорт тематикаһына һүрәттәр төшөрөү төркөмөн барлыҡҡа килтергән. Был төркөм әле лә уңышлы ғына эшләп килә, уның сиктәрендә йәштәр, балалар үҙ һәләттәрен аса, аралаша, таныша, ҡыҙыҡһыныуҙары бер булған яңы дуҫтар таба.

Интернет селтәрен үҙләштереүсе башҡорт йәштәре араһынан башҡорт теленә, балаларға рухи тәрбиә биреүгә битараф булмаусылар йыйылған әлеге осрашыу бөтәһенең дә фекерҙәрен, маҡсаттарын берләштергән координацион үҙәк төҙөп, унда төркөм, форум етәкселәре, блоггерҙарҙы туплау эшен башларға, тигән ҡарар ҡабул итте. Әлегә был үҙәкте етәкләү эшен яйға һалыу Светлана Иҫәнголова, Илфат Ишмөхәмәтов, Минзәлә Аҫҡарова, Рөстәм Нуриев һәм Заһир Ишкининга тапшырылды. Киләсәктә был үҙәк интернет селтәрендә башҡорт телендә аралашыусы төркөмдәр, сайттар, блогтар, форумдар һанын арттырыу юҫығында әһәмиәтле эш башҡарасаҡ, тип ышанғы килә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Тамсы тама-тама күл була, тигән кеүек, шулай берләшә- берләшә интернет селтәрендә милли, сәйәси, иҡтисади мәсьәләләр, башҡорт халҡының яҙмышы хаҡында яман хәбәр таратыусыларға белемле һәм төплө яуап ҡайтарырҙай рухлы йәштәр, балалар тәрбиәләүгә өлгәшә алырбыҙ, шик юҡ. Тик өлкәндәр ҙә, интернеттан айырылмайҙар, тип балаларҙы битәрләү урынына, улар ҡыҙыҡһынған бар өлкәгә рухи аҙыҡ, сәм, ғәм урынлаштырыуға үҙ өлөштәрен индерергә тейеш, тип уйлайбыҙ. Әлегә беҙ был эште башҡарыусы өлкәндәрҙән Гүзәл апай Ситдиҡованың ғына әүҙемлеген тоябыҙ һәм уға рәхмәтлебеҙ.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

---

*"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ -10 ЙЫЛ*

## РУХЫБЫҘ БАЙЫЙ

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булараҡ, шуны әйтергә теләйем: туған телебеҙҙәге матбуғат баҫмаларының уңышлы ижад емештәренә һәр көн, һәр сәғәт һөйөнөп йәшәйем һәм эшләйем. Уларҙың бөтәһен дә мөмкин булғанса ҡарап, күҙәтеп барырға тырышам, айырым материалдарын дәресемдә файҙаланам.

Төүге һандарынан уҡ күңелемә ятып өлгөргән "Киске Өфө" гәзитен айырым билдәләп үткем килә шулай ҙа. Сөнки дәрестәргә әҙерләнгәндә йышыраҡ уға мөрәжәғәт итергә тура килә. Был гәзиттең, башҡаларҙан айырмалы рәүештә, күңелгә ятышлы, рухыбыҙҙы байытырлыҡ донъяуи темаларға, шулай уҡ халҡыбыҙҙың рухи ҡомартҡылары, әҙәп-йола хазиналары һаҡлау һәм тергеҙеүгә бағышланған мәҡәләләрен дәрестә генә түгел, тәрбиәүи эштә лә файҙаланам. Мәҫәлән, "Аҡыл - ҡаҙна" рубрикаһы - үҙе бер табыш бит!

"Киске Өфө"нөң уҡымлы булыуы уның фактлар һәм ваҡиғаларҙы ҡоро яҡтыртыуға ғына түгел, ә уларға ҡарата гәзит авторҙарының, хәбәрселәрҙең үҙҙәренең мөнәсәбәтен белдереүгә ҡоролған булыуынан да ғибрәт, минеңсә. Шул уҡ ваҡытта уҡыусыға теге йәки был фекер көсләп тағылмай, ә фекер алышыу тәртибендә бирелеүе менән отошло, тип иҫәпләйем. Иң һуңғы, тос яңылыҡтарҙы йыйнаҡ ҡына шәлкемдәргә туплау ҙа иғтибарҙы йәлеп итә, юғиһә, ҙур итеп ҡабартып бирелгән хәбәрҙәрҙе уҡырға байтаҡ ваҡыт кәрәк булыр ине.

Гәзитебеҙ үҙенең һәр һанында бөртөкләп тигәндәй халыҡ аҡылын туплауы менән ҡиммәт. "Диалог", "Монолог", "Түңәрәк ҡор" рубрикаларындағы әңгәмәләргә абруйлы шәхестәребеҙ, аҡһаҡалдар, ағинәйҙәр менән бер рәттән, йәштәрҙең дә саҡырылыуы уларҙың фекер ҡеүәһен, күңелен үҫтереүгә булышлыҡ итәләр, тием. Теләгем шул: йәштәр темаһы артабан да үҙәк урындарҙың береһен биләп торһон гәзитебеҙҙә, сөнки милләтебеҙ киләсәге - уларҙың ҡулында бит.

**Гөлфирә ӘХМӘТШИНА,**
**Благовар районы Иҫке Күсәрбай урта мәктәбенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы.**

*XXI БЫУАТ ВАҠИҒАҺЫ*

**Ошо көндәрҙә "Башҡорт халҡы тарихы" ете томлығының сираттағы - 3-сө, 4-се, 6-сы томдары донъя күреүгә бәйле матур тантана булып үтте. Яңы ғына "мейестән сыҡҡан", полиграфия буяуы ла кибеп бөтмәгән был хеҙмәттәрҙең исем туйына республика етәкселеге, РФ Дәүләт Думаһы депутаттары, ғалимдар, һәм, әлбиттә, ошо проектты тормошҡа ашырыусы ғалимдар ҡатнашты. Ошо ваҡиға айҡанлы бер нисә кешенең фекерен белештек.**

# ТОМЛЫҠТАРҒА...

## башҡорт тарихы теркәлде

**Мансур ӘЮПОВ, БР Фәндәр академияһының вице-президенты, сәйәсәт фәндәре докторы, профессор:** "Башҡорт халҡы тарихы" ете томлығын яҙыу кеүек иҫ киткес ауыр, ҡатмарлы, оло ғилми эште ихтирамлы оло быуын тарихсылары башҡарып сыҡты. Күп томлы тарихтың фәнни нигеҙҙәрен, структураһын академик Нияз Мәжитов эшләне. Был ҙур эште башҡарыу буйынса конкурста Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты еңеп сыҡҡайны. Томлыҡтарҙы әҙерләгәндә БДУ, БДПУ, СДПА, башҡа юғары уҡыу йорттары белгестәре, Урал-Волга буйы төбәге, Мәскәү, Санкт-Петербург ғалимдары йәлеп ителде. 1-се том археолог В. Овсянников һәм телсе Ф. Хисамитдинова, 3-сө том - И. Аҡманов, 4-се том - Ә. Әсфәндийәров, 5-се том - М. Ҡолшәрипов, 6-сы том Р. Сәләймәнова етәкселегендә тупланды. Ташҡа баҫыр алдынан томдарҙың йөкмәткеһе БР Фәндәр академияһында тикшерелде, файҙалы кәңәштәр әйтелде.



Тағы шуны әйткем килә: беҙҙең тарихыбыҙҙа яңы мәғлүмәттәрҙең әлегә аҙ булыуы "Башҡорт халҡы тарихы" ете томлығын яҙғанда үҙен һиҙҙерҙе. Хөрмәтле тарихсыларыбыҙ Н. Мәжитов, Ә. Әсфәндийәров, И. Аҡманов, Н. Ҡолбахтин, М. Ҡолшәрипов, Р. Буканова һәм башҡа оло быуын ғалимдарының башлаған эштәрен дауам итеүсе йәштәр юҡ кимәлендә бөгөн. Әле республикалағы тиҫтәнән саҡ ҡына артығыраҡ тарих фәндәре докторының уртаса йәше 65-тә, шуның икәүһе генә 50 йәштән йәшерәк.

Республикала тарих фәне алдында торған мәсьәләләр хаҡында уйланғанда, Әхмәтзәки Вәлидиҙең төркөй халыҡтар тарихын өйрәнеүгә ҡағылған һүҙҙәре иҫкә төшә. Ул Стамбул университетында эшләгәндә төрки халыҡтар мәҙәниәтен булдырыу тәҡдиме менән уҡыу йорто етәксеһенә бер нисә хат яҙа. Шунда ғалим: "Төрки тарихын өйрәнеү өсөн тиҫтәгә яҡын сит тел белеү шарт", - ти. Бында Вәлиди, башҡорт, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ һ.б. төрки халыҡтарының үткәненә ҡағылған боронғо мәғлүмәттәр ғәрәп, фарсы, ҡытай, боронғо төрки, монгол, инглиз, немец, венгр, француз, фин, Һиндостанда йәшәгән ҡайһы бер халыҡтарҙың телендәге яҙмаларҙа, китаптарҙа һаҡлана, тигәнде күҙҙә тота. Был телдәрҙә беҙҙең быуын өйрәнмәне, сөнки быны өсөн мөмкинлек булманы. Ә бына хәҙерге йәштәр өйрәнә ала. Хәҙер интернетта башҡорт тарихына ҡағылған күп географик карталар бар. Улар 50-гә яҡын. Ватикан, Греция, Италия, Франция, АҠШ конгресы китапханаларынан алынған карталарҙа башҡорттар йәшәгән төбәк һәм ундағы ҡалалар асыҡ күрһәтелгән.

Күптән түгел Финляндияның Хельсинки университетында булырға тура килде. Унын китапханаһын махсус проект буйынса рус батшаһы Александр II һалдырған. Ҡыҙыҡһынып, кәштәләрҙе ҡарайым. Бәй, таныш китаптар теҙелгән: М. Ғафури, Ғ. Туҡай, ғәрәп хәрефтәре менән яҙылған журналдар, үткән быуаттың 20-се йылдарында нәшер ителгән "Большевик" журналдары төпләмәһе. Был баҫмалар нисек бында килеп эләккәне тураһында һорашһам, тарихы билдәле булып сыҡты. Тәүҙә университет Турку ҡалаһында урынлашҡан булған. Янғын сығып, ағас бина тулыһынса янып бөткән. Батша яңы бина һалдырғас, Рәсәйҙә сыҡҡан бөтә китап-журналдарҙың ике данаһын ошо яңы университетҡа ебәреү хаҡында күрһәтмә сығарған. Ә беҙҙең илдә ул китаптарҙың күбеһе юҡ, сөнки беҙ совет власы осоронда китапханаларҙы бер нисә мәртәбә сәйәси яҡтан "зарарлы" китаптарҙан таҙарттыҡ. Был университетта теләһә ҡайһы илдән килеп уҡырға мөмкин. Уҡыу бушлай, стипендия ла түләйҙәр. 1154 йылғы ғәрәп тарихсыһы Иҙриси картаһы ла килеп сыҡты шунда. Тимәк, тарихсыларыбыҙға эш етерлек әле, тик бағыу Вәлиди һанаған телдәрҙе өйрәнергә кәрәк. Ул саҡта "Башҡорт халҡы тарихы" томлыҡтары ла артасаҡ.

**Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА, Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты директоры:** "Башҡорт халҡы тарихы" тигән проектҡа тотонмаҫ элек, әлбиттә, "Башҡортостан тарихы" тигән серияла Сергей Руденконың, Раил Кузеев кеүек ғалимдарҙың башҡорттар тураһында китаптары донъя күргәйне. Әммә улар башлыса этнография өлкәһенә арналғайны. Ә бына боронғо осорҙан алып бөгөнгө көнгә тиклемге башҡорт халҡының тарихын тасуирлаған бындай китаптар юҡ ине. Ғөмүмән, ундай китаптар әле Рәсәй халыҡтарының береһендә лә юҡ. Шуның өсөн был проект беҙҙең милләт өсөн генә түгел, дөйөм алғанда Рәсәй дәүләтселеге өсөн дә бик мөһим. Сөнки Рәсәй халыҡтарының 20 процентын башҡа милләттәр тәшкил итә. Һәм уларҙың тарихы Рәсәй тарихынан айырылғыһыҙ. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, Рәсәй тарихында тик рус халҡы тарихын ғына һөйләйҙәр. Шуға ла һәр милләт үҙенең тарихын яҙырға тейеш. Беҙҙең башҡорт халҡының, мәҫәлән, ил кимәлендә генә түгел, донъя системаһында үҙ урыныбыҙ бар, һәм беҙ уны ла күрһәтергә тейешбеҙ. Бар донъяға, Рәсәйгә генә түгел, тәү сиратта, үҙебеҙҙең халҡыбыҙға еткерергә тейешбеҙ. Сөнки күпме йылдар тарихыбыҙҙы өйрәнмәнек, халҡыбыҙҙа үҙенең тарихын белмәү арҡаһында кәмһенеү тойғоһо йәшәне. Ошо етешһеҙлектән арынырға кәрәк бөгөн. Ете томлыҡ тарихы булған халыҡ барыбер ҙә бөйөк һәм быны менән һәр кем ғорурланырға тейеш. Был ете томға тарихыбыҙҙың барлыҡ биттәре лә инеп бөтмәгән, был - иң-иң тип һаналған этап осорҙарын үҙ эсенә ала. Ошо ете томдан һуң тағы ла дүрт том сығасаҡ, унда 72 архивтан алынған барлыҡ сығанаҡтар, материалдар инәсәк. Сит илдәрҙән Венгрия, Төркиә, Германия архивтарынан алынған материалдар ғына инде. Башҡа илдәрҙең, мәҫәлән, көнсығыштың архив материалдарын өйрәнеү өсөн әлегә белгестәребеҙ юҡ.

**Марат ҠОЛШӘРИПОВ, тарих фәндәре докторы, БДУ профессоры:** Әлбиттә, башҡорт халҡының тарихын яҙыу ул үҙе үк ҙур әһәмиәткә эйә. Бөгөн өс томдың исем туйын үткәрҙек, унан алда ике том донъя күргәйне. Йәмғеһе биш том булды. Өсөнсө том башҡорт халҡының урыҫ дәүләтенә ҡушылғандан һуңғы XVIII быуаттың аҙағына тиклемге осорҙо үҙ эсенә ала. Был осорҙо беҙ башҡорт ихтилалдары осоро, тип тә атайбыҙ, бигерәк тә XVII быуаттың аҙағы XVIII быуат башы башҡорт ихтилалдары менән туранан-тура бәйле. Шулай уҡ был томға тулыһынса XIX быуат тарихы - кантон режимы, реформанан һуңғы осор инә. Бында бигерәк тә 1812 йылғы Ватан һуғышына ҙур әһәмиәт бирелгән. Ни өсөн тигәндә, унда 20-нән артыҡ башҡорт полкы ҡатнашҡан. Алтынсы том - ул 1941 йылдан алып 1985 йылдар осорон үҙ эсенә ала. Үкенескә күрә, алтынсы томда бик аяныслы хаталар ебәрелгән. Мәҫәлән, башҡорттар араһынан сыҡҡан Советтар Союзы Геройҙары кәметелеп, 15 кеше тип күрһәтелгән, ә улар беҙҙә 52. Советтар Союзы Геройҙарына тиңләштерелгән өс Дан ордены кавалерҙары тураһында ла бер ниндәй мәғлүмәт юҡ. Күпме тапҡыр киҫәттем ошо томдың етәксеһен, төҙәтегеҙ, тип. Ләкин, ҡыҙғаныска күрә, төҙәтеү индерелмәгән. Бына шундай етешһеҙлектәр ҙә бар томлыҡтарҙа. Киләсәктә быны төҙәтеү бик ауыр буласаҡ, ни өсөн тигәндә, артабан кемдер башҡорт халҡының тарихы менән шөғөлләнергә ҡарар итһә, ул иң тәүҙә, академик хеҙмәт, тип, ошо томдарға мөрәжәғәт итәсәк һәм һылтанма яһаясаҡ. Халыҡ бит ташҡа баҫылғанды хаҡ тип ҡабул итә...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ яҙып алды.**

*АРҘАҠЛЫ БАШҠОРТТАР*

# ҠАСИМ АТЛЫ РӘССАМ



**Ҡасим Сәлиәскәр улы Дәүләткилдиев 1887 йылдың апрелендә Өфө губернаһы Өфө өйәҙенең Новоселовка олоҫонда (хәҙерге Благовар районы) донъяға килә. Башҡорттарҙан беренсе профессиональ рәссам. Башҡортостанда рәсем сәнғәтенә нигеҙ һалыусы.**

1937 йылдан СССР Рәссамдар берлеге ағзаһы. 1914 йылда Санкт-Петербург ҡалаһында барон Штиглицтың Үҙәк художество-сәнғәт училищеһын тамамлай. Артабанғы ике йылда шул уҡ училищела уҡытыусы булып эшләй, бер йыл Санкт-Петербург сәнғәт академияһында ирекле тыңлаусы булып йөрөй.

1917 йылдан алып Өфөлә йәшәй, сәнғәт түңәрәге ағзаһы була, тимер юл оҫтаханалары ҡарамағындағы рәсем студияһында, Өфө сәнғәт техникумында, башҡорт, татар педагогия курстарында уҡыта.

1928 - 1935 йылдарҙа Башҡортостандың көньяҡ-көнсығыш районларына М. И. Нестеров исемендәге Художество музейы коллекцияһы өсөн этнографик материалдар, башҡорттарҙың биҙәү-ғәмәли сәнғәт өлгөләрен йыйыу буйынса экспедицияларға сыға. Баймаҡ, Бөрйән районларына сәфәрҙәре һөҙөмтәһендә "Яңы Усман ауылы", "Түбә руднигы", "Баймаҡ заводының дөйөм күренеше" тип аталған пейзаж эштәрен ижад итә. Уның ижадының төп темаһы башҡорттарға, уларҙың тормош-көнкүрешенә арнала: "Башҡорт ыҙбаһының кутәрмәһе", "Башҡорт ҡыҙы", Зәңгәр күлдәкле башҡорт ҡыҙы", "Башҡорт Ибраһим", "Һунарсы башҡорт" һ.б. Бынан тыш, ул билдәле шәхестәрҙең портреттарын да яҙа. Мәҫәлән, "Мәжит Ғафуриҙың портреты", "Артист Минһаживтың портреты", "Пушкин башҡорттар араһында". Бөтөн был телгә алынған хеҙмәттәр М.И. Нестеров исемендәге художество музейында һаҡлана.

1924 йылда Башҡортостандың Мәғариф халыҡ комиссарҙары бер төркөм рәссамдарҙың художество-техник студияһын ойоштороу тураһында ҡарар ҡабул итә. Һуңынан был студия Башҡортостан художество техникумының һынлы сәнғәт бүлегенә әүерелә. Ҡасим Дәүләткилдиев унда оҙаҡ йылдар уҡытыусы булып эшләй, төрлө кимәлдәге күргәҙмәләрҙә ҡатнашып, билдәлелек яулай. Ул Башҡортостандың рәсем сәнғәтенең кимәлен билдәләүсе тотош бер арҙаҡлы төркөм рәссамдар тәрбиәләй. Уның уҡыусылары араһында Ғ.Имашева, Г. Мостафин, Р. Ишбулатов, Р. Ғүмәров, Р. Усманов һ.б. бар.

*✓ "Башҡалар һөйләшә белгәс, тормошта юғалып ҡалмаҫ, ә был бала ни эшләргә тейеш һуң? Ярҙам күберәк уға кәрәк бит", тип уйланыҡ та, Кристинаны үҙебеҙгә ҡыҙ итеп алырға булдыҡ. Уны балаларыбыҙ ҙа яҡын күреп ҡабул итте.*



# НИҒМӘТУЛЛИНДАРҘЫҢ

## Унда һәр кем үҙен

**Ишембай районы Һайран ауылы ир-уҙаманы Ғариф Ильясовҡа оҙаҡ һуғышырға насип булмай. Бөйөк Ватан һуғышы башланып, күп тә үтмәй, күҙенә пуля тейеп, ҡаты яралана. Госпиталдә булғандан һуң тыуған яғына ҡайтып килгәндә ул: "Иҫән-һау ҡайтып йәшәргә насип булһа, бер етем баланы алып тәрбиәләр инем",- тип әйтеү әйтә. Үҙҙәренең дүрт ҡыҙҙары янына бер малай алырға уйлаһалар ҙа, һағышлы күҙҙәре менән мөлдөрәп ҡарап торған ҡыҙ баланы аҫрауға алалар. Һуңынан асыҡланыуынса, ул ҡыҙ бала яугирҙең вафат булған ҡайнағаһының, йәғни ҡатынының бер туған ағаһының ҡыҙы булып сыға. Ильясовтар ул ҡыҙҙы ҡарап үҫтереп, кейәүгә бирә. Кем белә, бәлки, ошо мәлдән башлап уларҙың затында һәр етем балаға ҡарата ошондай, үҙ туғанындай яҡын күреп ҡарау тойғоһо барлыҡҡа килгәндер. Хәйер, әлек халҡыбыҙҙа ҡарауһыҙ ҡалған етем балалар бөтөнләй булмаған бит. Шулай булғас, Ғариф Ильясовтың ейәнсәре Шәрифә Ҡәҙир ҡыҙының етем балалар аҫрауға бәйле күңел фиҙаҡәрлегенә, йөрәк ҡаһарманлығына һоҡланырға ғына ҡала. Ул тормош иптәше, ошо уҡ районның Ғүмәр ауылында тыуып үҫеүсе Әнүәр Хөрмәт улы Ниғмәтуллин менән бер теләктә, бер уйлы булып, етем ҡалған 5 баланы тәрбиәгә алып, лайыҡлы тәрбиә, белем биреп, оло тормош юлына баҫтыра. Шуныһы иғтибарға лайыҡ: Ниғмәтуллиндар етемдәрҙе социаль хәленә, һаулығына, милләтенә ҡарамайынса, тәҡдим ителгәндәр араһынан иғтибарға, ҡарауға иң мохтаж булғандарын аҫрауға ала, шулай итеп, тура һәм образлы мәғәнәлә бер уйлы, бер маҡсатлы, бер үк көйҙө башҡарыусы "ғаилә оркестры" ойоштора. Был оркестрҙың дирижеры, әлбиттә, - Рәсәй Федерацияһының мәғариф отличнигы Шәрифә Ҡәҙир ҡыҙы, башлап уйнаусыһы - Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, "Рәсәйҙең иң яҡшы уҡытыусыһы" премияһы лауреаты Әнүәр Хөрмәт улы. Оркестр тигәндән, тура мәғәнәһендәге ғаилә оркестрын да ойоштора Ниғмәтуллиндар. Оркестрҙың уйын ҡоралдары: ҡурай, ҡумыҙ, мандолина, баян һәм фортепьяно. Тағы ла шуныһы: оркестр ағзаларының барыһының да туған теле - башҡорт теле һәм улар барыһы ла үҙен ошо милләттең айырылғыһыҙ бер өлөшө тип иҫәпләй.**

**"Йөҙ тапҡыр ишеткәнсе, бер тапҡыр барып күр", тигәндәй, ошондай үҙенсәлекле ғаилә менән яҡынданыраҡ танышыу маҡсатында Ишембай районының Биксән ауылына юл тоттоҡ. Һеҙҙең иғтибарға ғаилә башлыҡтары менән ҡорған әңгәмәне тәҡдим итәбеҙ.**

**▸ Шәрифә апай, Әнүәр ағай, һәр ғаилә уны ойоштороусыларының танышыуынан, мөхәббәтенән башлана. Тәүге тапҡыр бер-берегеҙҙе күргән мәлегеҙҙе иҫкә төшөрөп үтәйек әле.**

**Шәрифә Ҡәҙир ҡыҙы:** Мин университетты тамамлағас, химия буйынса аспирантураға инеп, фән юлынан китергә тейеш инем. Әммә нинәлер күңел ауылға тартты. Ауылға ҡайтҡас та яңылыш ҡарар ҡабул иткәнемде аңланым да, икеләнеүемде белдерергә тип районның мәғариф бүлеге мөдире Зөлҡәрнәев ағайға барҙым. Ул: "Ысынлап та, ниңә һинә ауылға ҡайтырға ине инде, ҡәрендәш? Аспирантураға барыу мөмкинлеге бирелгән икән, һин уны ҡушҡуллап ҡабул итергә тейеш инең..." - тип, минең кире Өфөгә китергә теләүемде хуплап ҡуйҙы. Әммә ул саҡта Ишембай районының Әхмәр мәктәбендә директор булып эшләүсе буласаҡ ҡайнағам, билдәле шағир Рауил Ниғмәтуллин осрап, мине үҙенең мәктәбенә химия уҡытыусыһы булып эшкә килергә өгөтләп, мине күндереп тә ҡуйҙы. Шулай итеп, Рауил ағай минең яҙмышты бороп ебәреп, хеҙмәт юлымды - мәктәпкә, шәхси тормошомдо үҙенең ҡустыһына бәйләп ҡуйҙы. Ул саҡта Әнүәр ҙә Әхмәр мәктәбендә эшләй ине. Мәктәп тормошо гөрләп тора, төрлө кисәләр ойоштораbыҙ, һәр кисәлә Рауил ағай үҙе лә ҡатнаша, шиғырҙарын уҡый, йырлай. Уҡыусыларыбыҙ ҙа бик әүҙем булды ул заманда. Бына шундай төрлө сараларҙы ойоштороп, бергә ҡатнашып йөрөгәндә аҡрынлап Әнүәр менән аралар яҡынайғандыр инде. Бер саҡ Наҡыя исемле башланғыс класс уҡытыусыһы миңә: "Ниңә Әнүәргә иғтибар итмәйһең? Һин килеп инһән, йылмайып һиңә ҡарап тик ултыра бит, уның һиңә битараф түгеллеген бөтә уҡытыусылар белә, һин генә белмәйһең", - тине. Мин бер күреүҙән ғашиҡ булыу бөтә кешегә лә ҡағылмайҙыр тип уйлайым. Әнүәргә лә мин бына шулай аралаша-аралаша йәйләп өйрәндем...

**Әнүәр Хөрмәт улы:** Шәрифә Әхмәр мәктәбенә килгәндә мин дә Стәрлетамаҡ мәҙәниәт ағартыу техникумын тамамлағандан һуң унда эшләй, музыка, география дәрестәрен алып бара инем. Шәрифәнең сабыр, тыныс холҡо, үҙен кешеләр араһында тота белеүе шунда уҡ оҡшаны.

**▸ Үҙ балаларың була тороп, сит балаларҙы тәрбиәгә алыу кешенән ҙур тәүәккәллек талап итәлер ул. Бына һеҙгә был аҙымға барыуға нимә сәбәпсе булды?**

**Шәрифә Ҡәҙир ҡыҙы:** Икенсе класта уҡығанымда бер ҡыҙҙың ата-әсәһе үлеп китте лә, уны һеңлеһе менән икеһен балалар йортона оҙаттылар. Уларҙы бар класыбыҙ менән йәлләй инек. Улар ауылға ялға ҡайтһа, әсәйем тиҙ генә ҡоймаҡ ҡоя ла: "Бар, Сания менән Сәриәнә үҙебеҙгә алып ҡайт", - тип ебәрә ине. Шул мәлдән алып етемдәрҙең хәлен еңеләйтергә ынтылыу тойғоһо һәр саҡ булды миндә. Тағы ла бер етем малай менән бер синыфта уҡыныҡ. Өлкән класҡа еткәс, ул миңә битараф булмауын белдереп, хат яҙа башланы. Армияла хеҙмәт иткәнендә лә хат яҙҙы. Егет булараҡ оҡшатҡан өсөн түгел, етем булғаны өсөн йәлләп яуап хаты яҙа инем уға. Университетта уҡығанда ҡыҙҙарға ҡарағанда ла яҡыныраҡ дуҫ булған тағы бер егет менән дә етем булғаны өсөн аралаштым. Ҡыҫҡаһы, етемдәрҙе йәлләү тойғоһо мине бер ваҡытта ла ташламаны. Был тойғо балаларыбыҙға ла күсте. Үзбәкстанда ер тетрәгәс, унда бер ғаиләлә етем ҡалған 5 баланы телевизорҙан күрһәткәндә 7 йәшлек оло ҡыҙым Айгөл: "Әсәй, уларҙың ата-әсәһе булмағас, йәл бит, әйҙә, уларҙың бишәүһен булһа ла алайыҡ", - тип илап ебәрҙе. Әйтерһең дә, Аллаһы Тәғәлә шул саҡ миңә бала теле менән күрһәтмә биргән һымаҡ булды. Биш һаны һәр саҡ минең иҫемдә булды һәм артабан ошо һанға бәйле ниәтебеҙ тормошҡа ашты ла. Беҙ ғаиләбеҙгә биш бала алдыҡ. Айгөл институтҡа ингәс, етенсе класта уҡыған кесе ҡыҙыбыҙ Ләйсән беҙгә: "Миңә иптәш алып ҡайтығыҙ, апайым уҡырға киткәс, мин яңғыҙ өйҙә ҡалмайым", - тип өҙә әйтеп ҡуйҙы.

Берҙән-бер көндө Әнүәр менән Петровск балалар йортона киттек, ундағы балалар Байғужалағы лагерға киткән булып сыҡты. Етәкселектән рөхсәт хаты яҙҙырып алдыҡ та, лагерға киттек. Ҡапҡаны асып инеү менән беҙгә бөтә балалар килеп йәбеште. Барыһы ла беҙҙе үҙҙәренең ата-әсәһе итеп күрә ине. Шул саҡта ситтәрәк яңғыҙы ғына баҫып торған бер ҡыҙға иғтибар иттек. Үҙе яланаяҡ, беҙгә күҙҙәрен мөлдөрәтеп ҡарай, тик һөйләшә белмәй, ҡайһы бер өндәрҙе дөрөҫ итеп әйтә алмай икән. Кристина исемле был ҡыҙҙы тәрбиәсе: "Ғаиләгә алырға яраҡһыҙҙар исемлегендә ул", - тине. "Башҡалар һөйләшә белгәс, тормошта юғалып ҡалмаҫ, ә был бала ни эшләргә тейеш һуң? Ярҙам күберәк уға кәрәк бит", - тип уйланыҡ та, Кристинаны үҙебеҙгә ҡыҙ итеп алырға булдыҡ. Уны балаларыбыҙ ҙа яҡын күреп ҡабул итте. Беҙ мулла саҡырып, Кристинаға Альбина тигән халыҡ-ара исем ҡуштырҙыҡ. Альбина мәктәптә уҡый башлағас, һөйләшергә лә өйрәнде.

**Әнүәр Хөрмәт улы:** Икебеҙ ҙә уҡытыусы булғас, был аҙымға кеше тәрбиәләү маҡсаты менән барҙыҡ. Шәрифәгә һаулығы буйынса икенсегә бала табырға ярамаһа ла, ул барыбер ныҡышып Ләйсәнде тапты. Ә мин ир кеше булараҡ, һәр ваҡыт малай теләнем. Тәүге тапҡыр бала алырға барғанда ла мин малай алып ҡайтыу тураһында хыялланғайным, әммә Альбинаны алып ҡайттыҡ бит инде. Беҙ ғаиләбеҙгә алған биш баланы ла ата-әсәһенә, милләтенә ҡарап һайламаныҡ. Аҙаҡтан ғына белдек, бәктиһәң, башҡалар балаларҙы һайлап алалар икән. Үҙебеҙ совет мәктәбендә белем алған, шул системала формалашҡан кешеләр булараҡ, һәр кешене яҡшы итеп тәрбиәләп була, тигән принциптан сығып эш иттек. Беҙ уларҙың барыһын да башҡортса һөйләшергә, ҡурайҙа, ҡумыҙҙа, мандолинала уйнарға өйрәттек. Ғаилә оркестрыбыҙ менән Ишембайҙа, Өфөлә күп тапҡырҙар сығыш яһаныҡ, призлы урындар яуланыҡ.

**▸ XVI быуатҡа тиклем, йәғни башҡорттар Мәскәү дәүләте менән килешеү төҙөгәнгә тиклем Башҡорт илендә тик башҡорттар ғына көн күреп, башҡа халыҡ вәкилдәренең беҙгә күсеп килеүе башланған. Әммә XVI быуатҡа тиклем дә Башҡорт иленә килеүселәр булған. Ул саҡта донъя һуғыштарынан, тәбиғәт һәләкәттәренән, һыу баҫыуҙан, ҡоролоҡтан ҡасып, беҙгә килеп һыйыныусыларға халҡыбыҙ йәшәр ер, донъя көтөр мөмкинлек биргән. Килеүселәр рәхмәт йөҙөнән башҡорттарҙың динен, тел-лөғәтен, бер һүҙ менән әйткәндә, башҡортлоғон ҡабул иткән. Ошо рәүешле төрлө ырыуҙарҙан торған башҡорт милләте формалашҡан, йәғни күп ырыуҙарҙан ойошҡан милләттең барлыҡҡа килеүендә бәләгә тарыусыларға ярҙам итеү маҡсаты ла булған. Бына беҙ уллыҡҡа йә ҡыҙ итеп алған сит милләт балалары ла беҙҙең милләтте ҡабул иткән. Һеҙ был процессы эстән тойған атай-әсәй булараҡ, уның ниндәй нескәлектәрен билдәләр инегеҙ? Беҙ һеҙҙең ми-**



**ҫалда беҙҙең ерҙә милләтебеҙ формалашыуы нисек барғанын күрә алабыҙ. Шулай түгелме?**

**Шәрифә Ҡәҙир ҡыҙы:** Беҙгә килгәндә балаларҙың барыһы ла русса һөйләшә ине һәм ғаиләбеҙ мөхите уларҙы тиҙ генә ошо мөхиттең бер өлөшө итеп ҡабул итте. Гөлназ менән Мәзһарҙың ата-әсәләре - татар, Әлфистең атаһы - башҡорт, әсәһе - мари, Таһирҙың әсәһе - мәрйә, атаһы - башҡорт, Альбинаның атаһы ла, әсәһе лә рус милләтенән. Беҙ һәр саҡ етемдәрҙе үҙебеҙгә тартып торабыҙ шикелле. Яҙмышыбыҙ шулдыр.

Ғаиләбеҙгә беренсе булып килгән Альбинабыҙ Ишембайҙа училищела уҡып алған һөнәре буйынса ашнаҡсы булып эшләй, Һайран ауылынан үҙе һымаҡ Әхмәт атлы етем егеткә кейәүгә сыҡты. Бөгөн улар Биксәндә йәшәй, Эльвина исемле ҡыҙҙары бар. Әлфистең тыуған яғы Ҡариҙел районы. Ул Ишембайҙа нефть колледжын тамамланы. Өйләнде, ике йәшлек Азалия тигән ҡыҙы бар. Әлеге ваҡытта Ямал ярымутрауында төҙөлөштә эшләй. Гөлназыбыҙҙың тыуған ере - Благовар районы. Стәрлетамаҡ физкультура техникумын, нефть техникумын тамамланы. **ҡорттар иһә "Бүре балаһын бүреккә һалһаң да, урманға ҡарай" ти. Был йәһәттән һеҙҙең проблемаларығыҙ булдымы?**

**Шәрифә Ҡәҙир ҡыҙы:** "Йылы ергә йылан да эйәләшә" тигән дә әйтем бар. Беҙ уларҙың барыһын да кеше итәбеҙ, барыһына ла юғары белем бирәбеҙ, тип хыялландыҡ. Бәҡтиһәң, бөтөн балаларға ла юғары белем биреү мөмкин түгел икән. Бында беҙгә бәйле булмаған факторҙар ҙа барлығын белдек. Кис булһа, һәр бүлмәгә берәр баланы ултыртып, дәрес әҙерләттек. Үҙебеҙҙең балаларҙың нисек уҡығанын да күрмәнек, тик аҫрауға алған балаларҙың береһен дә юғары белемле итә алманыҡ.

Әгәр ҙә кешенең ҡанына һалынмаһа, уны яһалма юл менән генә үҙгәртеү бик ауыр, үҙе бик ныҡ үҙгәрергә теләһә лә хатта. Әлфисте университеттың үҙем уҡыған химия факультетына уҡырға алып барҙым. Ул уҡырға инеүен инде, тик уҡый алманы. Шунан һуң беҙ уны Ишембай нефть техникумында түләп уҡыттыҡ. Етенсе класта уҡығанда Әлфис "Әсәй, минең ҡанды һурып алып, атайым менән һинекен минә һалып булмаймы ул?" һәр баланы әсе яҙмыш алып килә, бының өсөн уларҙың атаәсәһе ғәйепле. Шундай балаларҙы үҙ ҡуйыныбыҙға алып, уларҙың күңел йәрәхәтен саҡ ҡына булһа ла уңалта алғанбыҙ икән, улар ҙа беҙҙе иң яҡын кешеләре итеп күрә икән, беҙ, әлбиттә, бәхетлебеҙ. Таһирыбыҙ училище тамамлағас, Өфөгә эшкә урынлаштырырға алып барҙым. Аҙна буйы Өфөлә булып, Таһирҙы эшкә урынлаштырҙым да, ауылға ҡайтып киттем. Таһирым артымса уҡ ҡайтып килде. Ҡайтып инде лә, иланы ла ебәрҙе. "Әсәй, минең йәнем һеҙҙең янығыҙҙа, шуға сыҙамай ҡайттым", ти. Беҙ шуға шатбыҙ: балаларыбыҙҙың ҡайтып йөрөр атай йорто бар.

▸ **Шәрифә апай, һеҙ Юлай Ғәйнетдинов әҙерләгән "Хазина" тапшырыуында: "Һәр бер кеше математик, һәр бер кеше филолог була алмай, әммә рухи тәрбиә алған кеше барыбер юғалмай", - тип әйткәйнегеҙ. Ошоларға өҫтәп, тағы ла ниҙәр әйтерһегеҙ?**

**Шәрифә Ҡәҙир ҡыҙы:** Донъя көтөү бер ваҡытта ла беҙҙең төп маҡсат булманы. Дүрт һыйыр ҡараған саҡтарыбыҙ ҙа булды, уныһы ла балаларҙы ашатыу-эсереү өсөн ине. Ваҡытыбыҙҙың күп өлөшөн рухи тәрбиәгә бүлдек, ғаһаналмаған, тип һығымта яһарға булалыр.

**Шәрифә Ҡәҙир ҡыҙы:** 2006 йылда кесе ҡыҙыбыҙ Ләйсән кейәү менән юл фажиғәһенә эләгеп, һәләк булды. Ике балаһы тороп ҡалды. Хәҙер уйлайым: Айгөл ҡыҙыбыҙ һеҙлеһен юғалтҡандан һуң бер яңғыҙы ҡалыу ҡайғыһын нисек күтәрер ине? Әле балаларыбыҙ иң тәүҙә Ишембайҙа торған Айгөл апаларына һуғыла ла, шунан күмәкләп беҙгә ҡайталар. Миненсә, башҡорт ғаиләһендәге күмәк балалар ихтыяжы иң тәүҙә, атай-әсәй донъялыҡтан киткәндән һуң балалар яңғыҙ ҡалмаһын, тигән теләктән сығып үтәләндер.

**Әнүәр Хөрмәт улы:** Беҙ, ғөмүмән, "үҙебеҙҙең бала", "тәрбиәгә алған бала" тип уларҙы айырмайбыҙ. Барыһына ла тигеҙ ҡарарға тырышабыҙ. Быны балалар үҙҙәре лә һиҙә, тоя һәм үҙҙәренең йылы мөнәсәбәте менән яуап ҡайтара. Миненсә, күп балалы ғаиләләрҙә тәрбиә лә арыуыраҡ тип уйлайым. Унда балаларҙы атай-әсәй генә түгел, балалар үҙҙәре уҡ бер-береһен тәрбиәләй. Унда балалар бер-береһенә ярҙам итеп, бер-береһенең ышығында үҫә.

Айгөл хәҙерге ваҡытта Ишембай ҡалаһындағы балалар ижад йортонда ҡурай, мандолина, менән мин артҡа ултырҙыҡ. Шул саҡта Гөлназ, беҙгә рәхмәтле булыуын белдерептер инде, Күмертауҙан ҡайтып еткәнсе минә ҡарап йылмайып килде. Ул мине үҙенең әсәһе һымаҡ ҡабул итте. Бала ҡабул иткәс, әсәйгә нимә ҡала инде? Шул саҡтағы кисерештәремде һүҙ менән аңлатып булмай, уны тойорға ғына кәрәктер. Айгөл менән Ләйсәнебеҙ, беҙҙең ҡайтып етеүебеҙҙе мунса яғып көтөп торған. Ләйсән Гөлназды күрҙе лә: "Әсәй, ҡайҙан таптығыҙ ул шундай матур ҡыҙҙы?" - тип һорай һалды.

**Әнүәр Хөрмәт улы:** Әлфис бигерәк йонсоу ине. Ул тәүҙә минең янда тыныс ҡына ултырып килде лә, аҙаҡ минең ҡосаҡта ирене лә төштө. Атай, әсәй назына һыуһаған баланың ниндәй булғанын беҙ хәҙер бик яҡшы беләбеҙ инде.

▸ **Халыҡта "кәкүк-әсә" тигән төшөнсә бар, балаһын ташлаған әсәләргә шулай әйтәләр. Әммә тәбиғәттәге кәкүк балаһын ҡотҡарыр өсөн сит ояға йомортҡа һала. Сөнки себеш сығып, уны осорға өйрәтә башлағанға тиклем арала кәкүктең ауыҙынан ағыу бүленеп сыға һәм ул себешен ауыҙы менән ашатҡанда уны үлемесле ағыулай икән. Был күҙлектән ҡарағанда, "кәкүк-**

# "ҒАИЛӘ ОРКЕСТРЫ"...

## бәхетле итеп тоя

Минең күп кенә туғандарым Себерҙең Стрежевой ҡалаһында йәшәй һәм эшләй. Гөлназ уларҙың янында йәшәй һәм магазинда эшләй. Әле кейәүгә сыҡмаған, сәбәбен һорашһаҡ: "Атайым һымаҡ кешене эҙләйем әле", - ти. Таһирыбыҙ Ишембайҙа училище тамамланы, әлеге ваҡытта Өфөлә эшләп йөрөй. Мәзһарыбыҙ ныҡ шаян, тыңлауһыҙ булһа ла, беҙ уны дөрөҫ юлға баҫтыра алдыҡ, тип уйлайым.

**Әнүәр Хөрмәт улы:** Минең атайҙың ҡустыһы Зиннур ағай Германияла хеҙмәт иткәнендә немец ҡыҙына өйләнгән. Хеҙмәте үткәс, улар тыуған яҡтарға ҡайтты, тик тормош шарттары оҡшамайынса еңгәй үҙ иленә ҡайтып китте. Шунан һуң Зиннур ағай икенсегә рус ҡыҙына өйләнде. Надя-Нажиә еңгәй башҡортса ғына һөйләште, уларҙың балалары ла беҙҙең телде һәм милләтте ҡабул итте. Ошондай өлгө булғанға күрәләр ҙә, мин ғаиләбеҙгә алған балаларҙың беҙҙең милләткә ылығып китерен алдап уҡ белә инем.

**Шәрифә Ҡәҙир ҡыҙы:** Балаларҙың һәр береһе башҡорт теленә генә түгел, башҡорт рухына ла ылыҡты, тип уйлайым. Мәзһар, мәҫәлән, армияла Чечняла хеҙмәт итте. Бер саҡ ул ҡурай үлсәмдәрен һорап хат яҙҙы. Шунда көпшә табып, үлсәмдәр буйынса ҡурай яһап, чечендәр алдында уйнаған.

▸ **Урыҫтарҙа "тоҡтағы бесәй" тигән төшөнсә бар. Баш**тип һорап, беҙҙе бик ныҡ тетрәндергәйне.

**Әнүәр Хөрмәт улы:** Эйе, Әлфисебеҙгә һәр ваҡыт үҙ-үҙе менән, дөрөҫөрәге, ата-әсәһенән ҡанына һалынған менән көрәшергә тура килде. Техникумда уҡығанда иптәштәре менән һыра эскеләй башланы. Белеп ҡалып, дәүә белдергәйнем: "Атай, минең эскем килә бит", - ти. Ана шул саҡта ла ул беҙҙең ҡанды үҙенә һалыу хаҡында әйткәйне. Ул үҙ-үҙен еңә алмағанға, бының өсөн ихтыяр көсө етмәгәнгә әйткән бит инде быны.

**Шәрифә Ҡәҙир ҡыҙы:** Мин дә Әлфискә: "Һинең ата-әсәйең эсеп үлгән, һин алты йәшенә тиклем уларҙың эсеүе арҡаһында ниндәй михнәттәр күргәнеңде һөйләгәнең бар. Һинә бөтөнләй эсергә ярамай", - тип көн һайын тылҡый инем. Ул: "Әсәй, мин былай ҙа көрәшәм бит инде, тик барыбер эскем килә", - ти. Уның Павловкала йәшәгән бер туған апаһын эҙләп таптыҡ бер саҡ. Ул да Әлфискә: "Һинә яҙмыш йылмайған, Әлфис, һин матур ғаиләгә барып эләккәнһең. Атайәсәйебеҙ үлгәндә минә ун өс йәш ине. Мин астан үлмәҫ өсөн өс туған апаймыҙы биш балаһын ҡараным. Бер нәмәне башына һеңдереп ҡуй: беҙгә бөтөнләй эсергә ярамай. Мин хатта аҙ ғына һыра эсһәм дә, болара башлайым. Атайыбыҙ менән әсәйебеҙ ҙә гел эсеп боларып, беҙҙе тукмай торғайны, мин быны яҡшы хәтерләйем", - тине. Балалар йортона илә оркестрыбыҙ ҙа ошо маҡсаттан сығып төҙөлдө. Оркестр төҙөп, балаларға ҡурайҙа, ҡумыҙҙа, мандолинала уйнарға ла өйрәттек, шулай уҡ уларҙы берҙәмлеккә, коллектив тойғоға ла ылыҡтырҙыҡ. "Үҙ ғаиләгеҙҙе төҙөгәнгә тиклем һеҙҙең башҡа ғаиләгеҙ юҡ, шуға күрә һеҙ бер-берегеҙҙе яҡларға һәм һаҡларға өйрәнегеҙ", тип, мин уларға гел әйтә торғайным.

▸ **Башҡорт ғаиләһе элек-электән күп балалы булыуы менән билдәле. Күп балаға атай-әсәй булыу беҙҙең тәбиғәткә, ҡанға һалынған. Һеҙҙең фиҙакәр патронат эшмәкәрлегегеҙҙе ошо йолаға бәйләп аңлатып буламы?**

**Шәрифә Ҡәҙир ҡыҙы:** Альбинаны алып ҡайтҡас, өләсәйем: "Нинә был баланы алдың һуң?"- тип ризаһыҙлыҡ белдерҙе. Мин уға: "Һинән өйрәндем, өләсәй, үҙең бит етемдәрҙең ояһы булдың", - тип яуап бирҙем. Ысынлап та, беҙ иҫ белгәндән алып өләсәйем һәр ваҡыт кеше балаһын ҡараны. Бәҡтиһәң, олатайым менән өйләнгәс, тәүге йылдарҙа уларҙың балалары булмаған. Шунан улар бер етем баланы табып, уны өс көн буйы мунсала йыуындырып, үстереп, өйләндереп, кәзә бирепбашҡа сығарғандар.

**Әнүәр Хөрмәт улы:** Һуғыш ваҡытында беҙҙең ауыл урамында аслыҡтан интеггән йөрөгән ике немец балаһын әсәйемдәр өйгә индергән. Улар һуғыш бөткәнсе беҙҙә торған. Был миҫалдан сығып, башҡорт ғаиләһендә сит, етем бала бер саҡта ла артыҡ йәнҡумыҙ түңәрәге алып бара. Уның өлкән ҡыҙы Гөлнур нефть колледжын тамамлай. Ул - Аҡмулла исемендәге стипендия лауреаты. Бер үк ваҡытта фортепьяно класын тамамланы, вокаль түркөмгә, театр түңәрәгенә йөрөй. Гөлүзә Ишембайҙа V синыфта уҡый, музыка мәктәбенең 4 класында фортепьянола өйрәнә, матур йырлай, әсәһенең ҡурай түңәрәгенә йөрөй, мандолинала уйнай. Илһам Ишембайҙа башҡорт гимназияһында уҡый. Вокалға йөрөй, спорт менән шөғөлләнә. Ләйсәнебеҙҙең ҡыҙы Нурзилә Ишембайҙа башҡорт гимназияһында X синыфта уҡып йөрөй, Рузил улыбыҙ Өфөлә Башҡорт лицей-интернатында VII синыфта белем ала.

▸ **Һеҙ аҫрауға сит бала алыу буйынса оло тәжрибә тупланған кеше булараҡ, уларҙың ғаиләгеҙгә өйрәнеүе хаҡында ла әйтә алаһығыҙҙыр, ҡыҫҡаһы, улар ҡасандан һеҙҙе атаһы һәм әсәһе итеп тоя башланы?**

**Шәрифә Ҡәҙир ҡыҙы:** Улар барыһы ла беҙҙең өйгә килеп ингәс тә, Айгөл менән Ләйсәнгә эйәреп, беҙгә "атай", "әсәй" тип өндәшә башланы. Икенсе таптыр балалар йортона барғанда беҙ бер малай ғына алырбыҙ, тип ниәтләнгәйнек. Әммә тәрбиәсе: "Ошо ике баланы яҡшы ғаиләгә урынлаштырһам, пенсияға китермен, тип уйлағайным, икеһен дә алығыҙ инде", - тип беҙгә сат йәбеште. Быны шулай итеп беҙ Әлфис менән Гөлназды алып ҡайттыҡ. Әлфис автобустың алғы рәтендә Әнүәр янына ултырҙы, Гөлназ

**әсә" төшөнсәһе дөрөҫ түгел һымаҡ. Әммә әҙәм затынан булған әсәнең балаһын ташлап китеүен нисек аҡламаҡ кәрәк? Улар бит балаһының артабанғы яҙмышы тураһында уйлап та бирмәй...**

**Шәрифә Ҡәҙир ҡыҙы:** Эйе, етемдәрҙең яҙмышы төрлөсә булырға мөмкин. Былтыр етем балалар тураһында телевизорҙан тапшырыу булды. Шунда барлыҡ етем балаларҙың 90 процентына яҡынының насар юлға баҫыуы хаҡында әйтелде.

**Әнүәр Хөрмәт улы:** Мәзһарҙы әсәһе йәш ярымлыҡ сағында атаһына үс итеп ташлап киткән. Үҫеп еткәс, Шишмә районынан барып әсәһен таптыҡ, тик Мәзһар: "Әсәй берәү генә була, ҡараған кеше генә - әсәй", - тип, уның менән көрәшеүҙән баш тартты һәм машинанан да төшмәне.

**Шәрифә Ҡәҙир ҡыҙы:** Хәҙер инде "Инә һөтө менән инмәгәнде тана һөтө менән индереп булмай" тигәнде лә яҡшы беләбеҙ. Бөгөн балаларыбыҙ эшләп йөрөйҙәр, үҙ-үҙҙәрен ҡарайҙар, шуныһы менән дә ризабыҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Республика Президенты Указы менән 2012 йыл Имен бала саҡ һәм ғаилә ҡиммәттәрен нығытыу йылы тип иғлан ителгәйне. Уйлап ҡараһаң, Ниғмәтуллиндар ғаиләһендә был йыл әллә ҡасан уҡ, дөрөҫөрәге, ошо ғаиләгә нигеҙ һалыусыларҙың никаһынан уҡ башланған. Әгәр ҙә милләтебеҙҙең һәр бер ғаиләһе улар кеүек булһа, беҙ күпкә бәхетлерәк йәшәр инек.**

Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ
әңгәмә ҡорҙо.



Спартак ИЛЬЯСОВ

# ТӘҠДИР

(Хикәйә)

Һуғыш ана бөтә, бына бөтә, тигән айҙарҙағы ҡан ҡойғос бәрелештәрҙә йә аяғын, йә ҡулын өҙҙөргән, тәрән тән яраһы алған яралыларҙы, аяҡһыҙҙарҙы, ҡулһыҙҙарҙы тейәгән "Мәскәү - Иркутск" поезы 1945 йылдың октябрь аҙаҡтарында Өфөгә килеп туҡтаны. Туҡтауһыҙ һыҙланыуҙан йоҡоһон һис ҡандыра алмаған Үлмәҫҡол поезд тәгәрмәстәренең бер төрлө туҡылдауына, вагондың һәлмәк кенә бәүелеүенә иҙерәп ойоп киткәйне. Поезд туҡтағанда ҡапыл һелкенеүҙән, кешеләрҙең ҡысҡырып һөйләшеүенән иләүрәп уянып китте. Әле күҙен асмаҫ борон төшөндә һаман да шул һуңғы алыш, Берлинды алыр өсөн барған ҡанлы бәрелеш менән һаташа ине. Шунда ул окоп өҫтөнән үткән танк аҫтында ҡалып, уң ҡулынан яҙғайны. Ҡанһырап, балсыҡ аҫтында ятҡан Үлмәҫҡолдо осраҡлы рәүештә генә санитарҙар табып, ҡаҙып алды. Апрель айы аҙағынан лазареттан лазаретҡа күсә торғас, ете ай үтте. Ҡулының өҙөлгән ерендәге һөйәктәрен сүпләп таҙарттылар, йыуҙылар, текteләр. Яраһы йайлап сөрөшәйеп бөтәште тиерлек. Тик күгәреп-ҡыҙарып ҡалған тупыс ере ваҡыты-ваҡыты менән йә әсетеп, йә һулҡылдап һыҙлай. Бына әле лә булмаған ҡулының һыҙлауын тәне эсенә йотор өсөн ул күҙен асмай ғына байтаҡ ятты. Күҙен асһа, һыҙланыуы тәне эсенә инеп таралмай, кире һулҡылдап өҫкә килеп сығырҙай төҫлө ине. Шул тойғонан ҡурҡып ята бирҙе. Тышта ҡысҡырышып һөйләшкән тауышҡа, поездың әсе итеп һыҙғырыуына күҙен асып, һул терһәгенә таянып, тышҡа ҡараны. Тәҙрә аша аҡ халатлы шәфҡәт туташтарының носилкалар күтәреп йүгерешеүҙәрен күрҙе. Туҡтаған вокзалдың исемен уҡыны. Ҡаршылағы бейек йорт башына "Өфө - Уфа" тип яҙып ҡуйылғайны. "Өфө, Уфа", тип, үҙ-үҙенә ышанмай ҡат-ҡат уҡыны ул яҙыуҙы.

Санитар поезында һау кеше юҡ. Барыһы ла ғәрип, ауыр яралылар. Вагон эсендәге һәр кәштәлә ыңғырашыу, һәр кәштәлә һыҙланыу ауазы. Берәүҙең дә ҡайҙа алып китеп барыуҙарында эше юҡ. "Өфө" яҙыуын уҡығас, Үлмәҫҡолдоң күңеленә ләззәтле тыуған ер хисе, яҡынлыҡ тойғоһо килеп инде. Тыуған иленең, тыуған еренең татлы еҫен тойҙо ул. Дүрт йыл да дүрт ай элек Сыбаркүл ҡаласығында ашыҡ-бошоҡ винтовка менән сәпкә аттырҙылар, ҡул гранатаһын, танкты яндырыусы шешә шыйыҡсаны сәпкә ташларға өйрәттеләр ҙә, төндә тимер мейестәре төтәп ятҡан "телячий" тип аталған вагондарға тейәп, көнбайышҡа, фронтҡа оҙаттылар. Иртәнге һигеҙ менән туғыҙ араһында үткәйнеләр Өфө вокзалын. Поезд Өфөлә туҡтаманы. Үлмәҫҡол тәҙрә аша шул "Өфө - Уфа" яҙыуын уҡып үткәйне. Был яҙыу үҙгәрешһеҙ тиерлек, тик тутығып, әҙерәк буяуҙары ҡойолған. Әммә ул һаман да тыуған илдең ауазын бөркөп тора.

Поезд, һыҙланыуҙар, ыңғырашыуҙар тауышын баҫып, әсе итеп һыҙғыра-һыҙғыра, яйлап Өфөнө артта ҡалдырҙы. Үлмәҫҡол тәҙрә аша һәр ауыл, ҡасаба исемдәрен уҡый-уҡый, һарғайған үләнле ялансыҡтарҙы, һары япраҡлы урманды, кәбәндәрҙе, күбәләрҙе, игенлектәрҙән әле әүенгә ташылмаған көлтә өйөмдәрен ҡарап бара. Үлмәҫҡолдоң иҫәбе буйынса, поезд Мейәс ҡалаһына киске ун йәки ун бер самаһына барып етәсәк. Тик Үлмәҫҡол әле белмәй: Мейәс ҡалаһында поезд туҡтармы-юҡмы? Златоуста туҡтаһа, унан ауылға йыраҡ. 35 - 40 саҡрымды төп Урал армыты аша төшөргә кәрәк. Төндә, билдәле, арбалы ат та, йәйәүле иптәш тә осрамаҫ. Ә бына Мейәс ҡалаһынан ауылына ни бары 20 саҡрымдай ғына. Өҫтәүенә, Мейәскә тирә-йүн ауылдарынан кешеләр йөрөп тора. Һуғышҡа тиклем Үлмәҫҡол башҡа иптәштәре менән икешәр атта Мейәс элеваторына һәр көҙ ашлыҡ ташый ине. Бәлки, әле лә элеватор тирәһенә барһам, ылаусылар осрар, тип уйланы. Йөрәге елкенде.

Ауылда уны ҡатыны, дүрт улы көтә. Загорскиға килгән һуңғы хатында ҡатыны: "Малайҙарың тупылдашып үҫеп килә. Урал менән Мираҫ быйыл да миңә бесән эшләште. Һыйырыбыҙ, ике кәзәбеҙ бар. Һин ҡайтҡас һуйырбыҙ, тигән башмаҡты көпә-көндөҙ йылға буйында бүреләр ашаны. Һин ҡайтыуға Димгә алты, ә Сабурға дүрт тула. Атайым ҡайта, ул беҙгә күүүп итеп икмәк алып ҡайта, тип һәр саҡ һөйләнәләр..." - тип яҙғайны. Ҡатынының был хатын ул иң-иң ҡәҙерле аманат итеп түш кеҫәһенә һалған. Ул һәр саҡ, хат ятамы икән, тип һул ҡулының бармаҡтары менән түш кеҫәһен һәрмәп ҡарай. Үлмәҫҡол һуғышҡа киткәндә оло улы Уралға - ете ярым, Мираҫҡа - биш, Димгә - ике йәш ине. Ә бына Сабур донъяла юҡ ине. Атаһы әле уны күрмәгән. Уға хәҙер дүрт йәш тулып килә. Аяуһыҙ ҡанлы һуғыш барғанда яҙған хатында тыуасаҡ балаға Сабур мәрхүм ҡустыһының исемен, ҡыҙ бала булһа, Заһира тип мәрхүмә инәһенең исемен ҡушыуын һорағайны ҡатынынан. Ә бөгөн шул малайға дүрт тулып килә. Әле Загорск госпиталендә үк норма менән бирелгән көндәлек икмәкте йыяйыя, уларҙы ярты килограмм самаһына еткергәс, урамдағы һатыусыға икмәкте уйынсыҡ автомашинаға алмаштырып алып, тоҡсайының төбөнә һалып ҡуйғайны. Был автомашина әле күрмәгән улына бүләк.

Златоуст ҡалаһында поезд оҙаҡ ҡына торҙо. Унда ла эшелондан байтаҡ халыҡты төшөрҙөләр. Носилкалы санитарҙар, перронда арбалы аттар туҡ-туҡ йөрөнө. Ниһайәт, тағы ла ҡуҙғалып киттеләр. Инде тышта дөм-ҡараңғы. Мейәс ҡалаһына етергә бер сәғәт самаһы ваҡыт ҡалды. Вагон оҙатыусыһы Үлмәҫҡолдан юлда ҡулланыр өсөн бирелгән кружка, ҡалаҡ-тәгәсте алыр өсөн килгәс, ул эшелондың Мейәстә туҡтау-туҡтамауын һәм унда нисә минуттан етәсәген һораны, йөрәге шатлығынан тағы ла алҡымына тығылды. Иң алда ул өйөнә, балаларына күстәнәс итеп алып ҡайтыр өсөн юлға бирелгән "сухой паек" тигән төргәкте һалған тоҡсайҙы һау ҡалған һул ҡулын тығып һәрмәне. Бәләкәс Сабурға икмәк ҡатыларына алмашып алған ағас машинаны тотҡослап ҡараны. Ялпаҡ, эсе бешкән ҡып-ҡыҙыл ит иҙмәһе менән тулы, ә тышына ҙур итеп "MOR" тигән яҙыулы америка консерваһын да төпкәрәк тыҡты. Шунда уҡ һаҡал-мыйыҡ ҡыра торған үткер, ҡыҫҡа ғына трофей бритваһын, уны үткерләр өсөн ағас таҡта киҫәгенә ҡағылған ҡайышты, сепрәк киҫәгенә төрөлгән һабын киҫәген дә һәрмәне. Дәүләт милкен, кружка, тәгәс, алюмин ҡалаҡты тапшырғас, үҙен бөтөнләйгә үҙ аллы, ирекле итеп тойҙо. Бөтә булған бурыстар өҫтөнән ҡойолоп төштө лә ҡуйҙы. Хәҙер ул үҙенә үҙе хужа. Тиҙҙән, бик тиҙҙән үҙен көткән ҡатыны, балалары, йортона ҡайтып керәсәк. Төндө төн тип тормаясаҡ. Туп-тура, элеккенге белгән һуҡмаҡ менән атлаясаҡ та атлаясаҡ Үлмәҫҡол. Ҡабаланып, бик ҡабаланып, эшелонға тейәлер ваҡытта Загорский госпиталендә бирелгән иҫке булһа ла ныҡ, оҙон ҡуңыслы америка ботинкаһын, ойоҡ булмағанда сылғау урынына ҡулланылған "обмотка" тип аталған оҙон, киң, беше тауар менән йәпһеҙ итеп ялан аяғын солғаны. Әле уң ҡул эшенә өйрәнмәгән һулаҡайы оҙон обмотканы йәпле итеп тота ла, бәйләй ҙә алмай. Өҫтәүенә, поезд һелкенеп тиҙлеген кәметте, ҡыҫҡа-ҡыҫҡа итеп һыҙғырырға кереште. Вагондар бер-береһенә бәрелеп туҡтай башлағанда ул обмоткаһының осон уралған урамаға тығып, аяғүрә баҫты.

Купела ла, күршелә лә хушлашырлыҡ кеше юҡ. Барыһы ла һыҙлана, барыһы ла ыңғыраша. Шулай ҙа, яуап ала алмаһа ла, Үлмәҫҡол юлдаштары менән ҡысҡырып хушлашты. Башҡаса бер ваҡытта ла улар менән осраша ла, һөйләшә лә алмаясаҡтар бит. Шунан һуғыштың башынан алып Берлинға тиклем арҡаһынан төшмәгән беше туҡыманан тегелгән тоҡсайын һау ҡулбашына элеп, вагондан сығыу яғына йүнәлде.

Перронда һис бер әҙәм юҡ. Яңғыҙы ҡалған Үлмәҫҡол ҡайһы яҡҡа атларға икәнлеген билдәләр өсөн тирә-йүндәге иҫендә ҡалған айырым билдәләрҙе ҡарап сыҡты. Ҡараңғылыҡҡа бер аҙ өйрәнгән күҙҙәренә алыҫтағы йорттоң шәүлә-һыны пәйҙә булды. Был бит элек беҙ аттар менән ашлыҡ ташый торған элеваторҙың бейек ҡорамы, тип, шул яҡҡа ыңғайланы. Бәлки, ул элеватор көн-төн эшләйҙер. Тирә-йүндән туҡтамай ашлыҡ ташыйҙарҙыр. Юлға ыңғай юлаусылар булыр, тигән өмөт бар ине күңелендә. Ләкин элеватор ҡапҡаһы, уның алды буш ине. Бәләкәй ҡапҡаһын асып, эскә керергә тотҡа-фәлән эҙләгәндә ҡапыл таш стенаның икенсе яғынан ишек асылып китте лә ҡулдарына винтовка тотҡан ике кеше килеп сыҡты, уларҙың олорағы Үлмәҫҡолға һорау артынан һорау яуҙыра башланы. Аңлаштылар. Ҡораллылар тынысланды. Әммә үҙ иленә, үҙ еренә килеп етеп тә, уны йә енәйәтсе, йә ҡараҡ кеүек итеп һөйләшкән кешеләр Үлмәҫҡолдоң күңеленә ауыр яра һалды. Йөҙәрләгән, меңәрләгән үлектәр, яралылар араһында ла тик бер-береңде һаҡлау, яҡлау, тик дошманға ғына үс һәм нәфрәт тойғоһо эсендә ҡайнаған Үлмәҫҡол өсөн үҙ илендәге был мөнәсәбәт һис аңлашылманы. Уға был оло һуғыштан һуң кешеләр бер-береһе менән шул тиклем яҡындар, ихтирамлылар, ярҙамсылдар кеүек тойола ине. Бәлки, һуғыш осорондағы йыраҡ авиацияның бомбаға тотоуынан һаҡланыу саралары һаман да үҙ көсөндәлер, тип уйлап, Үлмәҫҡол баяғы ҡараулылсыларҙы күңеленән генә аҡлаған булып ҡуйҙы.

Ары китте. Вокзал, элеватор тирәһендәге ниндәйҙер соҡор-саҡыр, ташлыҡтар, ағас өйөмдәренә һөрөнөп, ике тапҡыр йығылып, яралы ҡулбашын ауырттырҙы. Һуңғы һөрөнөүҙә бигерәк тә уңайһыҙ йығылды. Һау һул ҡулы менән таянып та өлгөрмәне, тәкмәсләп китеп, уң ҡабырғаһы менән төштө. Эй эстәге һөйәктең һыҙлауы... Әллә осло башы менән тирене тишеп сыҡтымы? Түҙеп торғоһоҙ әсетеү үҙәгенә үтте. Ятҡан килеш һау ҡулы менән уң ҡулбашын һәрмәп ҡараны. Ҡан аҡмай шикелле. Ҡараңғыла һәрмәнә торғас, әйбер тоғон да бәйенән эләктереп табып алды. Һулҡылдап һыҙлай ине өҙөлгән ҡулбашы. Һулҡылдап һыҙлай. Һыҙлауына берәй төрлө им булмаҫмы, тип, әле генә ҡаты аңлашҡан ҡапҡа эргәһенә кире китте. Етте лә ҡапҡаны һау ҡулы менән дөбөрҙәтә башланы. Ҡапҡаға лаулап эттәр өрөп килде. Кемдер ҡапҡаға лап та лоп йүгереп килеп, Үлмәҫҡолдоң был тирәнән хәҙер үк китеүен талап итте, атып үлтерәсәге менән янаны. Үлмәҫҡол унан бер мөйөштә ҡунып сығырға урын һораны. Ҡапҡаның теге яғындағы кеше уны тағы ла әшәкерәк һүҙҙәр менән ҡойондорҙо, ҡапҡаны асып, уға автоматының көбәген тоҫҡаны. Көсһөҙләгәнән ғәрләнеп, күҙҙәренән йәштәре тәгәрәне Үлмәҫҡолдоң. "Мине, дүрт йыл дошман менән йөҙгә-йөҙ килеп һуғышҡан, бер ваҡытта ла ҡурҡып сигенмәгән, илен, ҡатынын, ғәзиз дүрт улын һаҡлап һуғышҡан һалдатты, бында элеваторҙа икмәк ашап һимергән тыл крысалары ҡул күтәртеп ҡыуа", - тип һулҡылданы ул. Үлмәҫҡол ҡараңғыға кергәс, артынан мылтыҡ атҡан тауыш яңғыраны. Зыйлап, ситтәнерәк пуля осоп үткәндәй тойолдо.

**(Дауамы бар).**

*✓ Беҙ уны һәр кешегә яҡты мөғәмәлә менән ҡараусы, хатта һис таныш булмаған сит кешегә лә ярҙам итергә атлығып тороусы, күңелендә уҫаллыҡтың, насар ниәттең осмото ла булмаған изге зат итеп беләбеҙ.*

ТӘБИҒӘТ БАЛАҺЫ

# ҺИН ФЛҮРҘЕ БЕЛӘҺЕҢМЕ?

## Беләм, "Бөрйән айыуын" әйтәһеңме?



**Беҙ уны үҙ-ара шаяртып һәм яратып "Айыу", "Бөрйән айыуы" тип атап йөрөтәбеҙ. Баһадир кәүҙәле булғаны, етмәһә, Бөрйәндең үҙендә тыуып-үҫкәне өсөн дә шулай атайбыҙ үҙен. Бөрйәндә тыуып-үҫһә лә, Флүрҙең тамырҙары атаһы яғынан Ишембай юрматыларына, әсәһе яғынан Баймаҡ бөрйәндәренә барып ялғана. Уның бала сағы Баймаҡ районының Темәс ауылында үтә. Ана шундай дуҫыбыҙ бар беҙҙең Бөрйәндә.**

Беҙ, Өфөлә йәшәүселәр, Бөрйәнгә юл төшһә, һәр ваҡыт Флүргә барып һыйынабыҙ, ул, ниндәй генә эше булыуға ҡарамаҫтан, уны ситкәрәк ҡуйып тороп, беҙҙе район буйлап оҙатып йөрөй. Ул үҙ ғүмерендә Шүлгәнташ мәмерйәһе, Көньяҡ Урал ҡурсаулығы тарафтарына, райондың башҡа гүзәл урындарына кемдәрҙе генә оҙатып йөрөмәне лә, уның Иҫке Собханғолдағы Ағиҙел яры башындағы йортонда кемдәр генә йоҡлап сыҡманы икән? Донъяның теләһә ниндәй урынында Бөрйән кешеһен осратып, танышҡанда, унан иң тәүҙә: "Һин Флүрҙе беләһеңме?" - тип һорау хәҙер инде был төбәк кешеһе менән танышыуҙың пароленә әүерелде. Бөрйән кешеһе был осраҡта Флүрҙе белеүен йә ҡысҡырып көлөп ебәреүе, йә уға бәйле берәр мәрәкәле хәл-ваҡиғаны бәйән итеүе менән аңлатып бирер. Бөрйәндәр уның исемен ишетеүгә ирендәренә йылмайыу ғәләмәте сығара икән, былар барыһы ла Флүрҙең кемлеге, уның ниндәй сифаттарға эйә булыуы хаҡында һөйләй булыр. Мин, мәҫәлән, Флүр менән утыҙ йыллап таныш булыу мөҙҙәтендә үҙемә ҡарата уның хатта бер насар ҡарашын да, ҡырын йә шикләнеү аша белдергән мөнәсәбәтен дә тойманым, башҡаларҙың да уның хаҡында әйткән бер насар һүҙен дә ишетмәнем. Беҙ, барыһынан элек, уны һәр кешегә яҡты мөғәмәлә менән ҡараусы, хатта һис таныш булмаған сит кешегә лә ярҙам итергә атлығып тороусы, күңелендә уҫаллыҡтың, насар ниәттең осмото ла булмаған изге зат итеп беләбеҙ.

80-се йылдарҙа Өфөлә тәүләп танышҡан саҡта ҡулында фотоаппарат тотҡан Флүр Ғазин һаман да шул һөнәренә һәм беҙ тәүбелмеш асылына тоғро. Беҙ танышҡандан алып күпме һыуҙар аҡты, быуат, меңйыллыҡ, ижтимағи ҡоролош алышынды, "Смена-8", "Зенит", "ФЭД" фотоаппараттары хәҙер инде музейҙарҙан урын алып, уларҙың урынына цифрлы электрон техникаһы алмашҡа килде, ә Флүр Ғазин һаман да беҙ белгән Флүр Ғазин булып ҡалды. Уның был тоғролоғо, моғайын да, тәбиғәт балаһы булыуына бәйлелер. Улай ғына ла түгел, уның фоторәссам булып китеүе лә тәбиғәткә тоғролоғонан килә. "Һыбай ҡыҙ", "Эш алтында түгел" тип аталған хикәйәләр китаптары уның халыҡ телен, уның психологияһын, тәбиғи асылын тәрән тойоусы, бөгөндән үк Башҡортостан Яҙыусылар союзына ағза итеп алырлыҡ әҙер яҙыусы булыуын да раҫлай.

"Темәс янында Һәүәнәкташ тигән матур ҡая бар ине. Ситтән бер кеше килеп, уны шартлатып, ташын төҙөлөш өсөн ҡулланырға булғайны, ул яраҡһыҙ булып сыҡты. Ҡая урыны ҡотһоҙ булып тороп ҡалды. Мин ошо хәлгә йәнем әрнеп, ул саҡтағы " Совет Башҡортостаны" гәзитенә мәҡәлә яҙып ебәрҙем. Барый атлы фотограф ағайҙа Һәүәнәкташтың шартлатырҙан алдағы матур фотоһы ла бар ине. Редакцияға ебәргән хатыма шул фотоны һәм ҡаяның әлеге аянчлы хәлдәге һынланышын ҡушып та һалып ебәрҙем. Мәҡәләм һәм фотолар гәзиттә баҫылып сыҡҡас, мин күҙ менән ҡаш араһында танылыу яулап, бер башҡа үҫеп киттем. Әлбиттә, был аҙымым хужаларға оҡшаманы. Уның ҡарауы, мин тырышлыҡ һалғанда үҙебеҙҙе уратып алған матурлыҡты һаҡлап ҡалыуҙың мөмкин икәнлеген аңланым. Икенсенән, замананың дауыл-елдәре ҡаяларҙы ла, йылғаларҙы ла ашай, ағастарҙы ла төбө-тамыры менән йолҡҡолай, кеше лә быға булышлыҡ итә. Матурлыҡ ошо рәүешле юҡҡа сыға. Әммә был матурлыҡ киләсәктә үҙен аяҡҡа баҫтырыр кешеләргә хеҙмәт итергә, бының өсөн ҡайҙалыр, нимәгәлер һынланып ҡалырға тейеш. Ошо маҡсатта фотоаппаратлы булдым да инде", тип ябай ғына итеп аңлатып китте Флүр үҙенең нисек итеп фоторәссам булып китеүе хаҡында.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Флүр Ғазин Өфөлә, Бөрйәндә, республика ауыл-ҡалаларында, Төркиәлә күп һанлы фотокүргәҙмәләр ойоштороп, үҙен сәнғәттең ошо төрөндә лә маһир ижадсы итеп танытты. Быйыл, йәғни үҙенең 50 йәшлек юбилей көндәрен ҡаршылағанда, ул матурлыҡ, гүзәллек һөйөүселәргә "Башҡортостандың мең мөғжизәһе" тип аталған күп томлы фотоальбом әҙерләй.**

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**



Алло, ишетмәйем, ҡысҡырыбыраҡ әйт...



Мосолман өкө.



Яратам мин һине, сабакы...



Йыназа



Рәсәй - Ҡытай дуҫлығы.

ИНТЕРНЕТТАН



# АҘЫҒЫН ДА...

## һауытын да ашап ҡуй

■ Гарвард университеты белгестәре пластик ҡалдыҡтарҙы утилләштереү проблемаһын хәл итеүҙә ярҙам итеү маҡсатынан аҙыҡ-түлек өсөн бик үҙенсәлекле - ашарға яраҡлы ҡаптар уйлап тапҡан. Аҙыҡ өсөн тәғәйенләнгән ашарға яраҡлы һауыттар WikiCells тигән атама алған. Улар тарҡала торған полимерҙарға аҙыҡ-түлек өҫтәмәләре ҡушып яһалған йоҡа ғына аҙыҡ мембранаһынан тора. Һыуланмай торған булыуҙары арҡаһында был һауыттарҙа шыйыҡ аҙыҡ-түлек тә яҡшы һаҡлана. Ҡаптың тәме булыуы ла, булмауы ла бар. Мәҫәлән, әлеге ваҡытта ғалимдар әфлисун һуты менән мембрана яһаған - әфлисун эсе сығып торған был һауытта аҙыҡтар ҙа сифатлы һаҡлана. Тик белгестәр әйтеүенсә, ҡаптың үҙе лә аҙыҡ булыуын онотորға ярамай, уның да боҙола башлауы ихтимал. Был үҙенсәлекле асыш авторҙары тиҙҙән ошондай ҡаптар магазин кәштәләренән пластик ҡаптарҙы ҡыҫырыҡлап сығарасаҡ, тип ышана. Әйткәндәй, бындай ҡаптар аҙыҡ-түлек етештереүселәргә күпмегә төшәсәге билдәһеҙ.

■ Пассив тәмәке тартыу күп ауыр сирҙәр барлыҡҡа килтерә. Иң хәүефле төркөмгә иң тәүҙә балалар инә, ти белгестәр. Яңыраҡ ғалимдар тағы ла бер асыш яһаған. Цинциннати университеты хеҙмәткәрҙәре үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ғаиләлә бөлөкәй саҡтан тәмәке төтөнө һуларға мәжбүр булған балаларҙың ете йәштә үпкә сирҙәренә дусар булыуы теркәлгән. Етмәһә, улар аллергияға тиҙерәк бирешеп бара. Атаһы, әсәһе йәки башҡа ғаилә ағзалары тәмәке тартыуы һөҙөмтәһендә ҡыҙҙарҙың үпкәләре малайҙарҙыҡына ҡарағанда 6 тапҡырға насарыраҡ эшләүе лә билдәле булған. Бигерәк тә 4 йәшкә тиклемге балаларҙың сәләмәтлегенә тәмәке төтөнө күберәк зыян килтерә икән.

■ Ғалимдар эш урынында кәрәгенән артыҡ ултырыуҙың тағы бер зыянлы ягын асыҡлаған. 11 сәғәткә һуҙылған эш көнө артыҡ ауырлыҡ, күреү һәләтенең түбәнәйеүе, иртә ҡартайыуға ғына түгел, ә депрессияға ла килтерә икән. Британия тикшеренеүселәре 5 йыл да 8 ай дауамында 2123 кешене тикшереп, ошондай һығымтаға килгән. Тикшеренеүҙә ваҡытында унда ҡатнашыусыларҙың социаль статусы, эштең ауырлыҡ кимәлен, уның күпме тәмәке тартыуын, алкоголь ҡулланыуы, ҡулланмауы, шулай уҡ илдәге дөйөм торош та иҫәпкә алынған. Ғалимдар әйтеүенсә, иҡтисади көрсөккә ҡарағанда, нормаһыҙ булған эш көнө депрессияға тиҙерәк килтергән. Стандарт ваҡыт - 8 сәғәт эшләүселәрҙән бындай хеҙмәткәрҙәрҙең депрессив төшөнкөлөк кимәле 2,3-2,5 тапҡырға юғарыраҡ булып сыҡҡан. Быны ғалимдар түбәндәгеүсә аңлата: бар ваҡытын эшендә үткәреүселәрҙең ғаиләһенә һәм төп рухи ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереүгә ваҡыты ҡалмай. Бынан тыш, гел көсөргәнештә булыу ҡанда стресс менән кортизол гормоны кимәлен күтәрә. Ул үҙ сиратында иммунитетты түбәнәйтә һәм ҡан баҫымын күтәрә.

■ Бөтөн донъя яман шеш тикшеренеүҙәре фонды белгестәре фекеренсә, йәйәү йөрөү яман шеш сирҙәрен булдырмау өсөн дә файҙалы. Көн һайын 45 минут физик әүҙемлек тә күптәрҙе был сирҙән ҡотҡара алыр ине, тип иҫәпләй табиптар. Медицина статистикаһы күрһәтеүенсә, даими әүҙемлек онкологик сирҙәрҙе булдырмауҙа мөһим урынды биләй. Физик әүҙемлек матдәләр алышыныу һәм организмдың таҙарыныу процесын көсәйтә. Яман шештең күп төрҙәре менән тап физик күнекмәләр ярҙамында көрәшергә була, тип белдерә ғалимдар.

ҺӘР КЕМ ҠОЛАҒЫНА

# ХОҘАЙ БИРГӘН - ТУЙЫМЛЫҠ,

## бәндә биргән - күңеллек

**Бөгөнгө көндә үҙ һаулығын ҡайғыртмаған кеше бик һирәктер. Был йәһәттән һәр кем үҙе белгәнен эшләй. Берәүҙәр сәләмәт йәшәү рәүеше алып бара, спорт менән шөғөлләнә, дарыу урынына үләндәр файҙалана, икенсе берәүҙәре ял йорттарына йышыраҡ йөрөргә тырыша. Ләкин нимә генә эшләһә лә, ҡайҙа ғына йөрөһә лә, бер кем дә ашамайынса тора алмай. Ә нимә ашайбыҙ һәм нисек туҡланабыҙ һуң бөгөн?**



### Ризығың яһалма бит...

Һуңғы йылдарҙа холестеринлы, трансгенлы (ГМО) аҙыҡ-түлектәрҙең киң ҡулланыла башлауы бер кемгә лә сер түгел. Был йәһәттән бәхәстәр ҙә тынмай. Кемдәрҙер, бындай матдәләрҙә аҙ миҡдарҙа ҡулланыу әллә ни зарарлы түгел, тиһә, икенселәре иһә уның киреһен дәлилләй. Һатыуҙа булған аҙыҡ-түлектең сифаты ябай күҙгә лә күренеп торған саҡта, зарарлы матдәләрҙең тирә-яҡ мөхит аша ғына түгел, ә ҡулланылған һауыт-һаба, аҙыҡты төрөү ҡағыҙы йә ҡабы, ризыҡҡа өҫтәлгән буяуҙар, эмульгатор, консервант һ.б. кеүек өҫтәмәләр аша әләгеүен дә хәтерҙә тотһаҡ ине... Магазин, супермаркеттарҙа аҙыҡ-түлек һайлағанда һатып алыусылар иң тәүҙә унын төҫөнә, еҫенә һәм һауытына ғына иғтибар итә, ә уның нимәнән эшләнгәнен белеү өсөн сағыу тышлыҡтағы ваҡ ҡына яҙыуҙарға күҙ ҙә һалмай. Был осраҡта, организмға зарарлы матдәләрҙең 90 проценты аҙыҡ-түлек, йәғни туҡланыу аша эләгеүен дә бер кем дә уйламай. Ҡайһы берәүҙәр аҙыҡтың тышлығына яҙылғанды аңлап та етмәй. Мәҫәлән, "Не содержит ГМО" тигән яҙыуҙы ла күптәрҙең уҡығаны бар. Ә нимәне аңлата һуң был яҙыу? Унын зыяны һәм файҙаһы нимәлә?

Гены модификацияланған, йәки трансгенлы аҙыҡтар тип икенсе үҫемлек йәки хайуандың гены ултыртылған организм атала. Был үҫемлеккә башҡа төрлө үҙенсәлек биреү, мәҫәлән, уның төрлө ауырыуҙарға, бөжәк-ҡорттарға бирешмәүсәнлеген арттырыу, тәмен, һаҡланыу ваҡытын, уңдырышлылығын яҡшыртыу маҡсатында эшләнә. Бындай эштәр махсус лабораторияларҙа башҡарыла. Мәҫәлән, ер еләгенең, томаттарҙың һыуыҡҡа сыҙамлылығын нығытыу өсөн уларға Арктика камбалаһы гены, картуфтың төрлө бөжәктәргә ҡаршылығын арттырыу өсөн ҡуныҙҙарға үлемесле булған бактерия гены, ә дөгө ярмаһына туҡлыҡлылыҡ биреү, сифатын яҡшыртыу өсөн әсә һөтө бүлеп сығарыуға яуап биргән кеше гены ултыртыла.

Беҙҙең илдә трансгенлы аҙыҡтарҙы етештереү тыйылған, ләкин уны сит илдән индереү һәм һатыу рөхсәт ителә. Шуға күрә лә һатыу кәштәләрендә гены модификацияланған соянан эшләнгән сыр, киптерелгән соя һөтө, туңдырмалар, спортсылар өсөн тәғәйенләнгән аҡһымлы аҙыҡ-түлек тулып ята. Рәсәйгә картуфтың гены модификацияланған бер төрөн һәм ике сортлы кукуруз индереү рөхсәт ителгән. Бынан тыш, һатыуҙа ошондай уҡ балыҡ, ит аҙыҡтары, йәшелсә-емештәр ҙә етерлек. Бөгөн бындай үҫемлектәр күп кенә колбаса, икмәк-булка, кондитер изделиеларында, үҫемлек майҙары, маргарин, майонез, балалар өсөн тәғәйенләнгән аҙыҡ-түлек составында бар. Бындай аҙыҡтарҙың тәме бер ни менән дә айырылмай, ләкин улар күпкә осһоҙораҡҡа һатыла. Гены модификацияланған аҙыҡтар сит илдән, күбеһенсә АҠШ-тан килтерелә. ГМО-ны Нестле (шоколад, кофе, балалар аҙығы), Хершис (шоколад, алкоголһеҙ эсемлектәр), Кока-Кола, Пепси-Кола (газлы эсемлектәр), Макдоналдс (тиҙ туҡландырыусы рестарандар), Данон (һөт һәм балалар аҙығы), Симилак (балалар аҙығы), Марс (Snikers, Twix, MilkyWay) һ.б. шуның кеүек билдәле компаниялар үҙ продукцияһында файҙалана.

Кеше мәнфәғәтен күҙ уңында тотоп, тәбиғәт ҡанундарын боҙоп уйлап сығарылған аҙыҡтарҙың файҙаһы ниндәй һуң? Һүҙ ҙә юҡ, кешелек донъяһының ҙур, эшкәртелгән һәм файҙаланылған ерҙәрҙең күпкә кәмеүе сәбәпле, гены модификацияланған аҙыҡтарҙы етештереү ауыл хужалығындағы ҙур проблемаларҙы хәл итә. Сөнки бындай аҙыҡтарҙы етештергәндә, ер майҙандарын ҙурайтмай ғына, уңдырышлылыҡты күтәреп, халыҡты ауыл хужалығы культуралары менән тәьмин итеүҙә арттырып була. Әлеге ваҡытта ГМО тәшкил иткән аҙыҡтарҙың файҙаһы һәм зыяны тулыһынса иҫбат ителмәгән. Был өлкәлә бәхәстәр ҡуйырғандан-ҡуйыра бара.

Осһоҙораҡ хаҡҡа трансгенлыны, әллә инде саҡ ҡына ҡыйбатыраҡҡа тәбиғи аҙыҡ һатып алырғамы икәнен һатып алыусы үҙе хәл итә. Бының өсөн ризыктың тышлығындағы яҙыуға күҙ һалырға ғына кәрәк. Үкенескә ҡаршы, әлегә лаборатор шарттарҙа мутанттарҙы билдәләүсе махсус методика юҡ, шунлыҡтан ГМО продуктарҙы контролдә тотоп булмай. Ошонан файҙаланып, ҡайһы бер экспортерҙар сауҙа ҡағиҙәһен боҙа һәм тауар тышына маркировка ҡуймай.

ГМО үҫемлектәр үҫеүгә әрһеҙ һәм уңдырышлы булғанлыҡтан, уның хаҡы ла осһоҙораҡ булырға тейеш. Ә инде маркировкаһы ҡуйылмаған тауарға гәзиттәге тауарҙыҡы менән бер үк хаҡ ҡуйыла. Шулай ҙа 2007 йылдың 1 сентябренән бындай аҙыҡтүлеккә контроль ҡәтғиләшә. Хәҙер, аҙыҡ составындағы ингредиенттар 0,9 проценттан артып киткән осраҡта, маркировка ҡуйыу мотлаҡ һанала. Элек был күрһәткес 5 процент булған. Рәсми мәғлүмәттәр буйынса, Рәсәйҙә һатылған аҙыҡ-түлектең һәр унынсыһы ГМО тәшкил итә. Бөгөн, бындай аҙыҡтарҙың организмға туранан-тура зыяны юҡ, тиһәләр ҙә, әлегә был факт ваҡыт тикшереүе үтмәгән.

### Сосиски яратһаң...

Һаулығыңдың 90 проценты туҡланыуыңдан тора, тип алда әйтеп үткәйнек инде. Бөгөнгө ваҡытта ашағаның ризыҡ та, ағыу ҙа булыуы ихтимал. Миҫалға колбаса, сосиски, сардельки кеүек аҙыҡтарҙы ғына алып ҡарайыҡ. Был өлкәлә етештереүсе компанияларҙың оҫталығының, хәйләһенең сиге юҡ. Төп ингредиенты бары тик ит кенә булырға тейеш продукцияға нимә генә ҡушмайҙар! Күп предприятиелар саҡ ҡына ит ҡалдыҡтары ҡалған һөйәкте пресс аҫтында бер төрлө массаға әйләндереп, ит урынына ҡуллана. Төрлө сит компоненттар ҡушыу юлы һәм һатып алыусыларҙың аңламауҙарынан файҙаланып, етештереүселәр үҙ тауарын күпкә экономиялай һәм артыҡ килем алыуға өлгәшә.

Сосиска һәм сарделькаларҙы ҡабалланғанда тиҙ генә әҙерләп ебәреү өсөн иң ҡулайлыһы тип һанайҙар. Шуға күрә лә әлегәрә унын артынан сират гәзиттәге ыҫланған колбасаға ҡарағанда күпкә оҙонораҡ була. Хәҙер һатыу кәштәләрендәге бындай продукцияның төрләләгенән күҙ ҡамаша. Ләкин уларҙың тәме элеккеләренә оҡшағанмы, ысын ит бармы һуң унын составында? Ғәҙәттә, һәр береһен тикшереп торорға күптәрҙең ваҡыты булмай. Шуға күрә, кәрәклеһен һәр кем кеҫәһенең ҡалынлығына ҡарап һайлай. Ә инде тышлыҡтағы яҙыуҙарҙы уҡып ҡарағандар, осһоҙораҡ продукцияның фосфат, нитрат, натрий нитриты (Е 250, төҫтө нығытҡыс, әйткәндәй, Рәсәй юғары токсинлы натрий нитритын аҙыҡ-түлек әҙерләүҙә ҡулланыусы берҙән-бер ил), натрий эритробаты, метилцеллюлоза, кошениль, каррагинан, соя концентраты, гуаровая камедь кеүек тотош химик элементтарҙан тороуын күреп, ғәжәп итер ине. Күптәр был химик матдәләрҙең тәмәнә өйрәнеп тә бөткән. Исемлектең иң башына, бының ит аҙығы икәнен белдерергә теләптер, күрәһең, майһыҙ суска ите, һыйыр ите, колбаса шпигы, сыр, суска йөрәге, суска тиреһе тигәнерәк яҙыуҙарҙы ла күрергә була. Әгәр ҙә яҙыуҙа соя юҡ, тип күрһәтелә икән, тимәк, уға аҙыҡ сүсе, күҙәнәкле туҡыма ҡушылған була. Ҡай саҡтарҙа со-

сискаларға он, крахмал, төрлө ярмалар ҙа өҫтәлә. Әлбиттә, был үлемесле түгел, тик был аҙыҡ өсөн ит хаҡы түләргә кәрәкме икән?

Төрлө ярымфабрикаттарға, колбаса изделиеларына ҡушылған матдәләр организм тарафынан физиологик яҡтан үҙләштерелеп бөтмәй. Был осраҡта организм аңлайышһыҙ аҙыҡты ни эшләтергә белмәй, аптырауға ҡала һәм үҙенең запасын тотона башлай. Ә был запас ресурстар үҫеш, әүҙемлек, буй өсөн бигерәк тә балаларға кәрәк. Өҫтәүенә, бындай сифатһыҙ ит аҙыҡтарының бер ниндәй ҙә туҡлыҡлығы юҡ, ләкин улар еңел ашала. Балаларҙы, исмаһам, өс йәшкә тиклем сосиска, колбасалар менән һыйламаҫҡа тәҡдим ителә. Бындай аҙыҡ төрө менән йыш мауыҡҡан ир-егеттәр ҙә уның сперматозоидтарҙың әүҙемлеген кәметеүен онотмаһын ине. Быларҙы яҙыу менән генә береһе лә өйрәнгән колбаса, сосискаларҙан баш тартмаяаҡ, әлбиттә. Шулай ҙа һәр кем үҙ организмы өсөн хәүефһеҙерәк аҙыҡ һайлай белергә тейеш.

Колбаса, сардельки, сосиски һайлағанда үтә алһыу йә көңгөрт төҫтәгеһен урап үтегеҙ. Ғәҙәттә, бындай аҙыҡтарҙың ҡайһы бер төрҙәренең тышлығы тәбиғи, тип яҙылған була. Әгәр ҙә йылытып эшкәрткәндә тышлыҡ йыртылһа, ул һалма була. Аҙыҡта коррагиндың миҡдарын уны ҡыҙҙырғанда йә микротулҡынлы мейестә бешергән саҡта белергә була. Әгәр ҙә аҙыҡ бөршәйә йә, киреһенсә, ҡабара икән, тимәк, бында коррагинды йәлләп тормағандар. Ә коррагин аллергия тыуҙырыуға сәбәпсе зарарлы матдә. Үтә тоҙло аҙыҡтарҙан да һағайыу кәрәк, унда натрий нитриты күп була, ә ул организм өсөн бик хәүефле. Сосиска үтә йомшаҡ икән, тимәк, ул күбеһенсә аҡһым өҫтәмәләренән тора. Крахмалдың миҡдарын да белеү ҡыйын түгел, бының өсөн аҙыҡтың бер өлөшөнә йод тамыҙып ҡарарға кәрәк. Тамсы күгәрә икән,тимәк, унда крахмал күп, ә ит әллә бар, әллә юҡ.

Элегерәк колбаса изделиеларының исмаһам 50 проценты ит булырға тейеш, тигән ГОСТ талаптары була. Күп етештереүселәр хәҙер был талаптан баш тарта, сөнки ГОСТ-ҡа ҡарағанда Техник талаптарға (Технические условия, ТУ. Был талаптарҙы предприятие үҙе әҙерләй) ярашлы аҙыҡ етештереү күпкә осһоҙораҡҡа төшә, әҙерләү талаптары ла юғары түгел. ТУ-ға ярашлы әҙерләнгән сосиски, колбасаларҙағы ит составына (уныһы ла иң түбән сифатлы) 10-30 процент хайуан майы һәм тиреһе, ҡош ите ( ысынында, ит ҡалдығы) инә. Ҡалғанында иһә нимә генә юҡ: аҡһымлы-майлы эмульсиялар, аҡһым стабилизаторҙары, ҡан; ат, һыйыр, сусҡа майҙары, сусҡа, тауыҡ тиреһе, һеңер. Бындай предприятиелар техник талаптар (ТУ) тип аталған үҙ рецебын булдыра һәм уны коммерция сере тигән сәбәп менән береһенә лә асмай.

## Сәй эсмәһәң, ниндәй көс!

Кем генә хуш еҫ бөркөп торған, тәмле ҡуйы сәй эсергә яратмай икән! Тик сәй яһауҙың да үҙенә күрә сере бар. Бының өсөн айырым оҫталыҡ талап ителә. Ләкин ҡайһы осраҡтарҙа оҫталыҡ менән генә лә әллә ни ҡырып булмай. Бында сәй етештереүселәрҙең намыҫлы булыуы ла ҙур әһәмиәткә эйә. Хәҙер, элекке кеүек, тышына фил төшөрөлгән һары тышлы һинд сәйен нисек ҡулға төшөрөргә, тип аптырамайһың. Сәйҙәрҙең ер аяғы, ер башынан килтерелгәндәре лә, үҙебеҙҙә етештерелгәндәре лә тулып ята, уларҙы дөрөҫ һайлай белергә генә кәрәк. Бөгөн беҙ яратып та, яратмай ҙа эскән сәйҙәребеҙ ниндәй һуң?

Пакеттағы сәйҙәр күбеһенсә сәй саңы була, йәғни сәй япраҡтарын эшкәрткәндән һуң ҡалған онтаҡ. Ниндәй сәй эсеүебеҙҙе белеү өсөн сәй ҡабының төбөнә ҡарау ҙа етә. Әгәр ҙә ҡаптың төбө таҙа булһа, һеҙ ысын сәй, ә инде бысраҡ икән, һеҙ сәй саңы һатып алғанһығыҙ. Пакетлы сәй сығышлыраҡ була, тиерһегеҙ. Бында яуап бер генә - буяғыстар. Шуныһы үкенесле, сәй ҡағыҙында буяғыс ҡулланылыуы тураһында бер ни ҙә күрһәтелмәй. Пакетлы сәйҙе һыуыҡ һыуға һалып, унда буяғыс булыуын тикшереп ҡарарға була. Буяғыс булһа, шунда уҡ һыуға төҫө сығасаҡ.

Тәбиғигә яҡын тәмләткестәр ысынына ҡарағанда күпкә көслөрәк һәм осһоҙораҡ була. Уның еҫенә ҡарап ҡына сифатлы сәй һатып алдым, тип уйлау дөрөҫ булмаҫ. Лабораторияла тикшерелгән сәйҙәрҙең 1/5 өлөшө тәмләткес булыуы асыҡланған. Киптерелгән емештәр ҙә сәй ҡабында күрһәтеү өсөн генә һалына. Сәйҙең ҡулланылыу ваҡыты 3 йыл. Ә Рәсәйҙә һатылған 20 процент сәйҙең яраҡлылыҡ ваҡыты сыҡҡан һәм унда организм өсөн зарарлы булған афлатоксин матдәһе була. Ғәҙәттә, сәй ҡабында йыйып алыныу ваҡыты түгел, ә ҡаптарға тултырылыу көнө генә күрһәтелә. Шуға күрә уның ниндәй ваҡытта нисек йыйып алыныуы сер булып ҡала. Шулай ҙа быны самалап белергә була. Әгәр ҙә сәйҙе бешергәс, уның өҫтөндә еңелсә генә күбек барлыҡҡа килһә, ул - яңы, күбек юҡ икән, тимәк, ул 2 йыл элек үк йыйылған. Сроғы үткән сәй эскәндә сынаяҡ төбөндә, уның ситендә ҡара төпрә ҡала.

Рәсәйҙә етештерелгән сәйҙең күпмелер өлөшө ялған, тиҙәр. Шунлыҡтан сәй һатып алғанда иғтибарлы булыу кәрәк. Әгәр ҡағыҙында Made in China йәки Made in Sri-Lanka тип яҙылһа, ул - ялған. Дөрөҫ яҙыу: Packed in Sri-Lanka булырға тейеш. Цейлон сәйенең ҡабына арыҫлан төшөрөлә, уның тиреһендә 17 төртөк була. Эсәр сәйегеҙ хуш еҫле, ашаған ризығығыҙ бәрәкәтле һәм файҙалы булһын!

**Эльза МӨХӘМӘҘИЕВА әҙерләне.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Аң тәбиғәте

Кеше аңының сикһеҙ мөмкинлектәре тураһында даими һөйләүсе ғалим-тикшеренеүселәр шундай һығымтаға килә: беҙ, ғәҙәттә, аңдың 25 процент ҡеүәтен генә файҙаланабыҙ икән, уныһы ла иң яҡшы көндәрҙә генә. Кеше ныҡлы сәләмәтлек һәм айыҡ аҡылға эйә булыуға проектланған, әммә тормош дауамында беҙ үҙүҙебеҙгә аяҡ салырға һәм нисек тә булһа шәхси камиллыҡҡа ҡаршылашырға өйрәнәбеҙ.

Бала саҡта барыбыҙҙың да камиллыҡҡа өлгәшеү өсөн идеаль тәүшарттары була. Һеҙ бала саҡта халыҡ алдында сығыш яһауҙан берәй тапҡыр ҡурҡтығыҙмы, яңы эш башлағанда йәки бейектән һыуға ырғығанда икеләндегеҙме? Әлбиттә, юҡ. Ул ваҡытта һеҙ кино йондоҙо, йыһангир йәки президент булырға хыялландығыҙ. Барығыҙҙың да хыялдары ҙур ине. Ҡайһы берҙәрегеҙ ҙур предприятиеларҙы етәкләргә йәки тотош илде алға алып барырға тип план ҡорҙо. Кемдер спорт геройы булырға йәки наҙлы һөйөү мөнәсәбәттәре хакимлыҡ иткән идеаль ғаилә тормошо менән йәшәргә хыялланды. Хыялдарығыҙ һәм көткән өмөттәрегеҙ ҡайҙа булды?

Эш шунда: һеҙ бары тик, хыялың буй етмәҫлек бейеклектә, тип ышандырған кешеләрҙең йоғонтоһона бирелдегеҙ. Һеҙгә, ғәҙәти кешеләр Аҡ йортҡа эләкмәй, иң яҡшыһы - баҫалҡы тормошҡа иҫәп тоторға һәм иҫәптәрҙе ваҡытында түләп барырға, ысын тормош ҡиммәттәре шунан ғибәрәт, тип тылҡынылар. Шулай итеп, әкренләп ысынбарлыҡтың башбаштаҡлығы ышанысығыҙҙы үлтерҙе, һөҙөмтәлә донъяғыҙ бөйөк образдарҙан фатир өсөн түләү һәм газондар сабыу кеүек аңлатмалар кимәленә төштө. Хәҙер һеҙгә ни бары еңеүле аң көйләнешен кире ҡайтарырға, эске донъяғыҙҙа яныр-янмаҫ ҡына ятҡан ҡуҙҙы ҡабат дөрләтергә кәрәк. Бының өсөн үҙеңде һәм энергиянды оҙайлы тормош уңышына бағышлау зарур. Элекке еңелеүҙәрегеҙ һәм проблемаларығыҙҙы мәңгелеккә онотоғоҙ. Тормош сифатына үҙгәрештәр индерергә тырышығыҙ, йыл да үтмәҫ, һөҙөмтәләр күренер. Һиҙелерлек яҡшырыуҙар - үҙ хәлегеҙҙәме ул, тормош энергияһындамы, финанс хәлегеҙҙәме йәки кешеләр менән мөнәсәбәттәрҙәме - алты ай ҙа түгел, хатта алты аҙна, алты көн дә көттөрмәҫ. Ысын үҙгәрештәр секунд эсендә тормошҡа ашыр - бары тик ныҡлы ҡарар ҡабул итергә генә кәрәк. Юҡҡа ғына боронғо мәҡәл: "Фекер сәсһәң - ғәмәл урырһың, ғәмәл сәсһәң - характер урырһың, характер сәсһәң - яҙмыш урырһың", - тимәй бит.

Шулай уҡ фекерҙе аныҡ нәмәгә туплауҙың сикһеҙ көсөн дә танырға кәрәк. Нимәгә ниәт ҡылһаң, шул һеҙҙең яҙмышығыҙға әүерелә. Фекерегеҙ донъяны формалаштыра. Нимәгәлер иғтибарығыҙҙы туплап, ыңғай мөмкинлектәр барлыҡҡа килә башлауын тойорһоғоҙ.

Ҡайһы бер кешегә эше йәки башҡалар менән мөнәсәбәте оҡшамай. Сөнки улар бөтөн иғтибарҙы гел кире күренештәргә генә йүнәлтә. Әгәр һеҙ тик яҡшылыҡҡа ғына иғтибар йүнәлтһәгеҙ, уңыш ҡаҙанырһығыҙ һәм тағы ла юғарыраҡ бейеклектәргә күтәрелерһегеҙ. Бында Герберт Уэллстың һүҙҙәрен онtorорға ярамай: "Кеше сәғәт һәм календарға табынып, тормоштоң һәр мәле - мөғжизә һәм серлелек икәнен онотorорға тейеш түгел".

**Робин ШАРМА.**

МӨҒЖИЗӘЛӘР ЗАМАНЫ



# КОСМОЭНЕРГЕТИКА ҺӘМ СӘЛӘМӘТЛЕК



## Мөхәббәт тураһында

**Мөхәббәт аныҡ, күп яҡлы, сикһеҙ, бөтә нәмәне солғап алған булыуы мөмкин. Ул - эмоциялар һәм хис-тойғолар, энергия. Кеше башҡаларҙы чакралары менән ярата!**

**Беренсе чакра - йәшәү.** Тимәк, кеше беренсе чакраһы менән ратһын өсөн уны ҡыйыҡ менән тәьмин итеү ҙә етә. Бер ғаилә асарбаҡты һыйындыра - йыуындыралар, кейендерәләр, туйындыралар. Ул уларҙы ихлас һәм сикһеҙ ярата, уларҙың һәр ҡайһыһы өсөн ғүмере лә йәл түгел. Был усаҡ өҫтөнә ҡыйыҡ ҡуйған кеүек: ул яҡты, тыныс яна.

**Икенсе чакра - енси энергия.** Мөхәббәттең нимәгә бәйле булыуы билдәле. Был шул уҡ усаҡҡа утын өҫтәп тороуға бәрәбәр, утын юҡ икән - мөхәббәт тә юҡ!

**Өсөнсө чакра - финанс ағымы.** Әгәр берәй ҡыҙға ҡиммәтле бүләктәр бирәләр икән (алтын биҙәүестәр, шәшке туны һ.б.) ул бындай кешене ихлас ярата - кейәүгә сыға. Шунда икенсеһе осрай - уға фатир, матур машина бүләк итә. Хәҙер инде ул уны ихлас ярата - уға кейәүгә сыға. Юлында яхта, самолет, утрау бүләк иткән өсөнсө тап булһа, ул уға ихлас ғашиҡ була. Был осраҡта усаҡ матур мөхиткә мохтаж.

**Дүртенсе чакра** - мөхәббәт чакраһы, тимәк, унда йөрәк менән яраталар. Әммә был наҙлылыҡ, шәфҡәтлелек чакраһы һәм уртаҡлыҡ теләй. Әгәр ике майшәмде бер-береһенә яҡын килтерһәң (ике йөрәкте), ут яҡтыраҡ һәм көслөрәк яна башлай. Ләкин уларҙы айырһаң - ауыр, йөрәк ауырта, ялҡын һүнә. Бындай мөхәббәттә кемдер ҡорбан да булыуы мөмкин.

**Бишенсе чакра** - ижад чакраһы. Уға ярашлы, илһамланып һәм бер ниндәй насар уйһыҙ яраталар. Мәҫәлән, артисты. Мөхәббәт өсөн бер нәмә лә талап итмәйҙәр.

**Алтынсы чакра** - аң чакраһы. Бер кемде лә айырмай яраталар. Яраталар ғына түгел, ә үҙҙәренең мөхәббәте менән дауалайҙар. Был бар кешене лә тигеҙ йылытҡан ҡояш кеүек.

**Етенсе чакра** - Аллаһы Тәғәлә менән бәйләнеш. Илаһи мөхәббәт. Был ваҡытта бер ниндәй айырмалыҡ күрмәй бөтөн нәмәне яраталар. Кешене генә түгел, уның һәр күҙәнәген, һәр атомын.

**Хәҙер һеҙ ниндәй чакра менән яратыуығыҙҙы белә алаһығыҙ.** Бәлки, бер нисә чакра менән бер юлылыр. Мәҫәлән: беренсе һәм өсөнсө, икенсе һәм өсөнсө, икенсе һәм дүртенсе һ.б.

